ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 декабрь (аҡъюлай) 2025

№49 (1193)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Йәш шайморатовсылар балы



3

Дөйә түгеллегеңде иҫбатла!



4-5

Ҡайта алмаған уландарҙың...



йондоҙло дандары ҡалды

8-9

Ырыуҙарын да танынылар



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 3 декабрҙән 13-нә тиклемге үн көнлөктә республиканың һәр ҡала-ауылында ПР905 индексы "Киске Өфө"гә 2026 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 905 һум 04 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ.*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ТУҒАНЛЫҠТЫ КӘРӘК ЯҢЫРТЫУҘАР...

**1995 йылдың 1-2 июнендә Башҡортостандың яңы тарихында барса милләттәштәребеҙҙе рухландырған ҙур ваҡиға булып уҙҙы: баш ҡалабыҙ Өфөлә республикабыҙҙа, Рәсәйҙә, донъяның башҡа илдәрендә йәшәгән башҡорт халҡы вәкилдәре оло йыйынға - I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына йыйылды.**

Ҡоролтайға һайланған 609 делегат араһында Венгрия, Германия, Франция, Польша, Латвия, Төркиә, АҠШ, Ҡытай, Гонконг, Перу һәм Көньяҡ Африка Республикаһында йәшәгән башҡорттарҙың вәкилдәре, Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһенең 6 иленән - 20, Рәсәйҙең 28 субъектынан 146 башҡорт кешеһе ҡатнашыуы ошо сараны ысынлап та бөтә донъя кимәленә күтәрҙе.

Делегаттар алдында Башҡортостандың Беренсе Президенты М.Ғ. Рәхимов ҙур доклад менән сығыш яһаны. Уның телмәрендә башҡорт халҡының, республикабыҙҙың тарихи үҫеше менән бәйле сағыу ваҡиғалар, уҙған быуаттың 90-сы йылдарында барған ҡатмарлы сәйәси-иҡтисади үҙгәрештәр осоронда халҡыбыҙ алдында торған проблемалар, милли дәүләтселек һәм федерализм мәсьәләләре, туған телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, милли традицияларыбыҙҙы һаҡлау һәм үҫтереү буйынса алда торған көнүҙәк маҡсаттар сағылыш тапты. "Тап беҙҙең республикабыҙ халҡыбыҙҙың берҙән-бер дәүләти берләшмәһе булып тора, һәм ул башҡорттарҙың барса рухи ҡиммәттәрен, теленең һәм мәҙәниәтенең барса байлығын, милли үҙенсәлектәрен һаҡларға һәм арттырырға бурыслы", - тигәйне Мортаза Ғөбәйҙулла улы.

Ҡоролтайҙың пленар һәм 10 секцияһы ултырыштарында сығыш яһаған делегаттар күтәреп сыҡҡан мәсьәләләр буйынса бик етди фекер алышыуҙар ерлегендә мөһим ҡарарҙар ҡабул ителгәйне, улар бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ҡоролтайға арналған шиғри ҡотлауында әйтелгән һүҙҙәре бөгөн дә ҡолаҡ төбөндә яңғырап торғандай:

*"Хәсрәт түгел, хәстәр йыйҙы беҙҙе:*
*Туғанлыҡты кәрәк яңыртыуҙар,*
*Һүрелмәһен өмөт, һүнмәһен дәрт,*
*Һүнеп ҡалғанда ла янар тауҙар.*

*Йөҙәтмәһен әжәл юраусылар,*
*Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ,*
*Үҙебеҙҙең йырыбыҙҙы йырлап,*
*Тарих арбаһында барасаҡбыҙ".*

*ШАҒИР ҺҮҘЕ*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

*Беҙҙе илле иткән тел ул;*
*Беҙҙе билле иткән тел ул;*
*Беҙҙе йәнле иткән тел ул;*
*Беҙҙе йүнле иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Беҙҙе батыр иткән тел ул;*
*Беҙҙе матур иткән тел ул;*
*Беҙҙе ғорур иткән тел ул;*
*Беҙҙе сабыр иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Уралды төйәк иткән тел ул;*
*Беҙҙе һөйәк иткән тел ул;*
*Беҙҙе көйәк иткән тел ул;*
*Беҙҙе бөйөк иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Йөҙ халыҡты аңлар тел ул;*
*Изгелекте һанлар тел ул;*
*Моңло, йырлы, сәсән тел ул;*
*Утты-һыуҙы кискән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

*Мең-мең йылдар уткән тел ул;*
*Мең киҫелеп үҫкән тел ул;*
*Ҡылды ҡырҡҡа киҫкән тел ул;*
*Дуҫлыҡты аманат иткән тел ул, -*
*һай, афарин, башҡорт теле!*

**Хәким ҒИЛӘЖЕВ.**

*ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ*

## ӘСӘМ БИРГӘН...

**Башҡорт халҡының телебеҙ тураһындағы ҡайһы бер мәҡәлдәре һәм әйтемдәрен иҫкә төшөрөп китәйек:**

• Әсәм биргән туған тел,
Бабам биргән ҡорал тел,
Халҡым биргән оран тел.
• Аҡыл - ҡаҙна, тел - асҡыс.
• Теле барҙың иле бар, иле барҙың көнө бар.
• Тел - ҡылыс, урынын белеп ҡый, урынын белеп тый.
• Тел өсөн баш яуап бирә.
• Ауыҙға һыймаған тел ауылдан ҡыуҙыра.
• Телһеҙҙең телен әсәһе белер.
• Тураға юл - тел менән,
түрәгә юл - мал менән.
• Икмәкте ҡул бүлә, илде тел бүлә.
• Тел - күңел көҙгөһө.
• Ниндәй тел менән тыуғанһың,
шул телең менән көн ит.
• Мираҫ итеп мал бир,
малдан алда тел бир.
• Тел - хазина, тотонһаң, арта ғына.
• Яман әҙәм шул булыр,
ауыҙында ике тел булыр,
Алдында һине ағартыр,
артында һине ҡаралтыр.

12+

ҠЫҪҠАСА

# ПРЕЗИДЕНТҠА ШАЛТЫРАТ!

**19 декабрҙә Мәскәү ваҡыты буйынса көндөҙгө сәғәт 12-лә "Владимир Путин менән йыл йомғаҡтары" программаһы эфирға сыға, тип хәбәр иттеләр Кремлдең матбуғат хеҙмәтенән.** Һәр ваҡыттағыса, дәүләт башлығы Владимир Путин тура эфирҙа уҙып барған йылға йомғаҡ яһай, журналистарҙың һәм халыҡтың һорауҙарына яуап бирә. Һәр кем moskva-putinu.ru (москва-путину.рф) программаһы сайтында, 0-40-40 номерына һәм 8-800-200-40-40 телефоны буйынса СМС йәки ММС-хәбәр ярҙамында һорау бирергә мөмкин. Һорауҙар махсус мобиль ҡушымта аша ла ҡабул ителә (был хаҡта тулыраҡ программаның сайтында белергә була). Рәсәй Президентына текст һәм видеоһорауҙарҙы "Бәйләнештә" һәм "Класташтар" социаль селтәрҙәре аша ебәрергә мөмкин. Һорауҙар Мәскәү ваҡыты менән көндөҙгө 3-тән алып 19 декабрҙә программа тамамланғансы ҡабул ителә.

✔**Радий Хәбиров Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә яуаплы министрҙарға Яңы йылды байрам итеү йәһәтенән йөкләмәләр бирҙе.** "Көндәр һыуытһа, боҙҙан һындар яһарға мөмкинлек булыр тип көтәбеҙ. Өфөлә һәм ҡалаларҙа емелдәп торған арт-объекттар ҡуйыла", - тип отчет бирҙе Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова. "Ошондай шарттарҙа процесс менән идара итегеҙ", - тине Радий Хәбиров. Шулай уҡ республика етәксеһе мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙинға балалар өсөн Яңы йыл шыршыларын үткәреү мәсьәләләрен контролдә тоторға ҡушты. 25 декабрҙә Башҡортостан Башлығы шыршыһына һәм муниципаль яңы йыл шыршыларына әҙерлек эштәре бара, тип яуаплы министр. Радий Хәбиров сараларҙы хәүефһеҙ үткәреүҙе ойоштороу кәрәклеген дә билдәләне. Республика етәксеһе Мәҙәниәт министрлығына Яңы йыл саралары планы хаҡында иҫкә төшөрҙө.

✔**Социаль фонд күп балалы әсәйҙәрҙән пенсияны ҡайтанан иҫәпләүгә ғаризалар ҡабул итә.** Яңы йылдан күп балалы әсәләр арттырылған түләүҙәр ала башлай. Рәсәй Социаль фонды бөгөндән биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән әсәйҙәрҙән пенсияны ҡайтанан иҫәпләүгә ғаризалар ҡабул итә башланы. Яңы ҡағиҙәләргә ярашлы, 2026 йылдан күп балалы әсәйҙәргә пенсия юллағанда бөтә балалар, шул иҫәптән ғаиләләге бишенсе, алтынсы һәм артабанғы балалар ҙа иҫәпкә алына. Был үҙгәрештәр 2026 йылдан хаҡлы ялға сыға башлаған ҡатын-ҡыҙҙарға ғына түгел, пенсия алғандарға ла ҡағыла. Социаль фондта пенсияны ҡайтанан иҫәпләү тураһында ғаризалар ҡабул ителә. Ғаризаны әле үк йәшәгән урын буйынса Социаль фондтың филиалында һәм Дәүләт хеҙмәттәре порталында бирергә мөмкин. Ғаризаға балалар тураһында мәғлүмәттәр, мәҫәлән, тыуыу тураһында таныҡлыҡтың һанлы күсермәһен тапшырырға була. Күп балалы әсәләр арттырылған түләүҙәрҙе яңы йылдан ала башлай. Декабрҙә бирелгән ғаризалар буйынса страховка пенсияһы ғинуарҙан ҡабаттан иҫәпләнә.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ЖУРНАЛИСТАР ЙЫЙЫНЫНДА



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Журналистар союзының XXIV съезы эшендә ҡатнашты. Республика етәксеһе киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренә юғары профессионализм, әүҙем граждандлыҡ позицияһы һәм социаль яуаплылыҡ өсөн рәхмәт белдерҙе.**

- Башҡортостандың медиатармағы - профессионалдарҙың ҙур, көслө командаһы. Дәүләт киң мәғлүмәт сараларында ғына 2,5 меңдән ашыу кеше эшләй. Республика үҙенең теле һәм радиоканалдары, үҫешкән муниципаль телестудиялар селтәре, Башҡортостан халыҡтарының 6 телендә нәшер ителгән 146 баҫма матбуғаты менән билдәле. Электрон киң мәғлүмәт саралары әүҙем үҫешә. Улар барыһы ла мөһим социаль миссия үтәй - дәүләт менән йәмғиәт араһында коммуникацияларҙы көйләй, ышаныс мөхитен тыуҙыра, кешеләрҙе ялғандан һәм алданыуҙан һаҡлай, - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Башҡортостан Башлығы бөгөн республикала хәрби хәбәрселәр пулы булдырылыуы хаҡында һөйләне. Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып Башҡортостанда хәрби хәбәрселәрҙең статусын нығытҡан закон ҡабул ителде. "Бөгөн ошо залда Азат Саҙрыев, Эдуард Ҡусҡарбәков, Айнур Кәбиров, Рәмил Мансуров, Мөнир Ҡунафин, Артур Дәүләтбәков, Гүзәл Хәмитова, Ильяс Батыргәрәев, Илдар Байбулатов һәм башҡалар ултыра. Бөрйән районының "Таң" гәзите редакцияһы водителе Иршат Сәйетбатталов 70-тән ашыу тапҡыр МХО биләмәһенә гуманитар йөк алып барған. БСТ телеканалы водителе Иван Шабрин, дөйөм алғанда, бөтәһе 367 көн МХО биләмәһендә булған. Былдай миҫалдар бик күп. Яугир яҡташтарыбыҙға ярҙам өсөн барыһына ла рәхмәт белдерәм", - тине Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, йыйында Союз идараһы рәйесе итеп йәнә бер тауыштан Вәдүт Исхаҡов һайланды. Вәдүт Ғәйфулла улы Исхаҡов - журналист, педагог, йәмәғәт эшмәкәре. 2018 йылдан - "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире. 2020 йылдың декабренән - Башҡортостандың Журналистар союзы рәйесе. Журналистика өлкәһендәге "Дөрөҫлөк. Яуаплылыҡ. Ҡаһарманлыҡ" премияһы лауреаты.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# БИЗНЕС АҘНАЛЫҒЫ ТАМАМ

**Башҡортостандың баш ҡалаһында XVIII Халыҡ-ара бизнес аҙналығы булыпы үтте.**

Глобаль саҡырыуҙар дәүерендә хеҙмәттәшлек стратегияһына арналған ҙур форумға рәсми делегациялар һәм халыҡ-ара бизнес-берләшмәләр вәкилдәре килде. Уҙған йылдарҙағы кеүек үк, Халыҡ-ара бизнес аҙналығында Ҡытай, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Белоруссия, Төркиә, Тажикстан вәкилдәре ҡатнашты. Ҡатнашыусыларға һәр ваҡыттағыса бай эшлекле программа тәҡдим ителде. Мәҫәлән, тәүге көндә форумда һөҙөмтәле идара итеү мәсьәләләре тикшерелде: тематик дискуссиялар, секциялар һәм оҫталыҡ дәрестәре ойошторолдо. Көн дауамында идара итеү ҡарарҙары хакатоны эшләне. Бынан тыш, "Йыл эшҡыуары - 2025" республика конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы булды.

Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров билдәләүенсә, Халыҡ-ара бизнес аҙналығы - Башҡортостан өсөн генә түгел, тотош Рәсәй өсөн дә мөһим ваҡиға. "Был уникаль майҙансыҡта идеялар тыуа, ышаныс күперҙәре һәм оҙайлы партнерлыҡтар төҙөлә. Әле беҙ 10 дәүләттең вәкилдәрен ҡабул иттек. Халыҡ-ара бизнес аҙналығында күп кенә сит ил компаниялары тәүге тапҡыр Рәсәй баҙарына инеү мөмкинлеген алды. Тимәк, беҙҙең форум донъяның күп кенә уйынсылары өсөн Рәсәйгә үҙенсәлекле тәҙрә булып тора", - тине Андрей Назаров.

# ЭШЛЕКЛЕ СӘФӘР - ҮЗБӘКСТАНҒА

**Ташкентта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Үзбәкстан менән Рәсәй араһында иҡтисади хеҙмәттәшлек буйынса хөкүмәт-ара комиссияның 26-сы ултырышында ҡатнашты. Уны Рәсәй Хөкүмәте рәйесенең беренсе урынбаҫары Денис Мантуров һәм Үзбәкстан премьер-министры урынбаҫары Жамшид Ходжаев үткәрҙе.**

Ултырышта билдәләүҙәренсә, 2024 йылда Рәсәй менән Үзбәкстан араһында тауар әйләнеше биш проценттан ашыуға артҡан, 10 миллиард долларҙан күберәк. 2025 йылдың туғыҙ айында үҙ-ара сауҙа күләме тағы ла һигеҙ процентҡа артҡан. Экспорт һәм импорт тауарҙары ыңғай динамика күрһәтә. "Илебеҙҙең инвестиция хеҙмәттәшлеге лә ошондай ыңғай йүнәлештә үҫешә. Республикала Рәсәй ҡатнашлығындағы 3 меңдән ашыу предприятие эшләй, был иһә Үзбәкстандағы сит ил капиталы булған бөтә компанияларҙың 20 проценты самаһы", - тине Денис Мантуров. Билдәләнеүенсә, мәҙәни-гуманитар бәйләнештәрҙе үҫтереү, берлектәге конгресс-күргәҙмә сараларын үткәреү ике ил араһында төрлө яҡлы хеҙмәттәшлекте нығытыуға булышлыҡ итә.

Ултырыш йомғаҡтары буйынса Жамшид Ходжаев һәм Радий Хәбиров Үзбәкстан менән Башҡортостан төбәктәре араһында сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлекте үҫтереү буйынса юл картаһына ҡул ҡуйҙы. Ул сәнәғәт кооперацияһы һәм инвестиция сәйәсәте, агросәнәғәт комплексы, сауҙа, туризм, мәғариф, мәҙәниәт, спорт өлкәләрендә һәм башҡа йүнәлештәр буйынса үҙ-ара эш итеүҙе киңәйтеүҙе күҙ уңында тота. Әйткәндәй, Үзбәкстан әле Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә 4,2 процент өлөш менән етенсе урынды биләй. Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса ул 16,7 процент үҫеш менән 197,9 миллион долларға еткән.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Хөкүмәте рәйесенең беренсе урынбаҫары Денис Мантуров менән Үзбәкстан президенты Шәфкәт Мирзиёев менән осрашыуҙа ла ҡатнашты. Яҡтар дәүләттәрҙең иҡтисадтың өҫтөнлөклө тармаҡтарында тормошҡа ашырған уртаҡ проекттарын, мәғариф һәм фән өлкәләрендә үҙ-ара эш итеүҙе, төбәктәр хеҙмәттәшлеген тикшерҙе.

"Беҙ Үзбәкстан менән күптән төрлө йүнәлештәрҙә тығыҙ эшләйбеҙ. Был осрашыу Башҡортостандың Үзбәкстан менән мөнәсәбәттәрен үҫтереү өсөн яҡшы этәргес булыр тип ышанам, - тип яҙҙы Радий Хәбиров. - Рәсәй Президенты Владимир Путин кеүек үк, Шәфкәт Миромон улы ла ике илдең төбәктәре араһында партнерлыҡты нығытыуға етди иғтибар бүлә. Артабан эшләйбеҙ".

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Өфөнөң Көрәш һарайында сараларҙы йышыраҡ үткәрергә саҡырҙы. Уның һүҙҙәренсә, был объект килгән кешеләрҙе тәүлек әйләнәһенә ҡабул итергә һәләтле. "Көрәш һарайында ойошторолған саралар һәр ваҡыт күләмле булыуы менән айырылып тора. Унда бик уңайлы. Былылдан башлап "Динамо-Урал" волейбол командаһы уйындарын үткәрәбеҙ. Ошондай ҙур объект тәүлегенә 24 сәғәт эшләргә тейеш", - тигән бурыс ҡуйҙы Радий Хәбиров республиканың спорт министры Руслан Хәбибовҡа.

✔Башҡортостандың "Алға" махсус иҡтисади зонаһы Рәсәй Махсус иҡтисади зонаһының инвестициялар йәлеп итеү буйынса Милли рейтингында өсөнсө урын алды. "Алға" быға тиклем рейтингтың махсус номинацияларында еңгәйне инде. Ике тапҡыр әүҙем үҫешеүсе биләмә тип табылды. Әле килеп - тәүге өсөү иҫәбендә", - тине был уңышҡа үҙ фекерен белдереп, Республика Башлығы Радий Хәбиров.

✔Башҡортостанға, шул иҫәптән Рәсәй Федерацияһының 18 субъектына йыл аҙағына тиклем социаль газ үткәреү программаһына өҫтәмә аҡса бүленә. Был хаҡта федераль Хөкүмәттә хәбәр иттеләр. Төбәктәр был аҡсаны йорттарҙы газ селтәрҙәренә тоташтырыуға субсидиялар өсөн файҙалана ала. Былдай ярҙамға күп балалы ата-әсәләр һәм аҙ килемле граждандар, МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары, I төркөм инвалидтары, инвалид балаларҙы ҡараған кешеләр, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары хоҡуҡлы. 2025 йылда 55 төбәктә социаль газ үткәреү программаһын тормошҡа ашырыу өсөн бөтәһе 1 миллиард һум йүнәлтелгән.

✔Республиканың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, быйыл "Тормош өсөн инфраструктура" милли проекты сиктәрендә Туймазы районында - Ык йылғаһы, Ауырғазы районында - Түрһәгәҙе йылғаһы һәм Ҡырмыҫҡалы районында Бәләкәй йылға аша күпер ҡоролмалары тәртипкә килтерелгән. Уларҙың дөйөм оҙонлоғо 291 метр тәшкил итә.

✔Республика клиник перинаталь үҙәге үпкәне яһалма елләтеү өсөн яңы 17 берәмек аппарат алды. Был хаҡта Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Заманса ҡоралмаҡ үҙәктең реанимация һәм яңы тыуған сабыйҙар интенсив терапияһы бүлектәренә ҡуйыласаҡ. Улар сабыйҙарҙың үпкәһенә көсәргәнеште кәметә һәм тиҙерәк һауыҡырға булышлыҡ итә.

✔Дыуан районының Мәсәғүт ауылында 218 метр арауығында үҙәкләштерелгән йылылыҡ менән тәьмин итеү селтәрҙәрен капиталь ремонтлау тамамлана. Инженер инфраструктураһын комплексы яңыртыу авария осраҡтарын кәметәсәк, ти белгестәр. Һөҙөмтәлә Мәсәғүт ауылында йәшәгән 150 кеше йылылыҡ менән тотороҡло тәьмин ителәсәк.

✓ Башҡортостан, республикабыҙ өсөн ғорурлана алырҙай геройҙарыбыҙ булыуы ҙур бәхет. Тап ошо маҡсат менән беҙ үҙ ваҡытында "йәш шайморатовсылар" кластарын астыҡ.



БАЙРАМҒА КИЛЕГЕҘ!

# КҮРГӘҘМӘЛӘР, ТАМАШАЛАР...

**Йыл һайын 14 декабрҙә республикала Башҡорт теле көнө билдәләнә. 2019 йылда Башҡортостан Башлығы указы менән раҫланған байрам бөйөк башҡорт мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған көнөнә тура килә. Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, быйыл да мәҙәниәт учреждениеларында Башҡорт теле көнөнә арналған байрам саралары уҙғарыла.**




Аҡмулла музейында *25 декабргә* тиклем "Мифтахетдин Аҡмулла - шиғриәт йондоҙо" күргәҙмәһе эшләй.

*12 декабрҙә* Ш.Бабич музейында - "Башҡорт теле - дуҫлыҡ теле" интеллектуаль уйыны, *13 декабрҙә* М. Өмөтбаев музейында "Тел -халыҡ рухы" әҙәби-фольклор квесы уҙа.

*12 декабрҙә* Республика Хәрби Дан музейында башҡорт каллиграфияһы буйынса оҫталыҡ дәресе ҡаралған. Шулай уҡ республиканың дәүләт һәм муниципаль музейҙарында тематик экскурсиялар һәм "Тыуған телдең матурлығы һәм көсө" республика музей акцияһы ойоштороласаҡ.

*13 декабрҙә* Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының ҙур залында Башҡортостан Республикаһының Милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры ҡатнашлығында Башҡорт теле көнөнә ҡарата Азат Байчуриндың юбилей концерты була.

*14 декабрҙә* Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһенә Зөһрә Бураҡаева пьесаһы буйынса Рөстәм Хәкимов ҡуйған "Аҡмулла" спектакле сыға. Шулай уҡ театр башҡорт шағирҙарының шиғырҙары яҙылған видеороликтарҙы онлайн күрһәтә.

*12 декабрҙә* Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында Хөрмәтулла Үтәшев "Таҙа телмәр" оҫталыҡ дәресе үткәрә. Ә *14 декабрҙә* тамашасылар театр сәхнәһендә "Мөхәббәт тураһында тағы бер тапҡыр..." спектаклен ҡарай ала.

*14 декабрҙә* "Башҡортостан" киностудияһы "Аҡмулла", "Башҡорт милли кейеме", "Остаз", "Күнел моңо", "Асия Ғәйнуллина" документаль фильмдарын онлайн күрһәтә.

Нефтекама дәүләт филармонияһында "Кәрҙәштәр" башҡорт эстрада төркөмө концерты үтә, Стәрлетамаҡ театр-концерт берекмәһе "Урман оркестры" музыкаль программаһын тәҡдим итә.

*14 декабрҙә* БР Халыҡтар дуҫлығы йорто Башҡорт теле көнөнә арналған ҡыҫҡа видеороликтар серияһын башлай. Республика ҡалаларында һәм районҙарында тарихи-мәҙәни үҙәктәрҙә викториналар, конкурстар, оҫталыҡ дәрестәре һәм фольклор программалары ҡаралған.

Башҡорт теле көнөнә ҡарата ил төбәктәрендә лә байрам саралары планлаштырыла. Екатеринбургта Свердловск өлкәһенең Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге активистары менән осрашыу үтә. Ырымбур өлкәһенең Претория ауылында "Ырымбур ягы легендалары" әҙәби сәғәте ойоштороласаҡ. Ҡурған өлкәһенең Сафаҡул ауылында байрам концерты була.

АФАРИН!

# ЙӘШ ШАЙМОРАТОВСЫЛАР БАЛЫ

**Өфөлә икенсе тапҡыр "Йәш шайморатовсылар балы" уҙҙы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың 23 районында һәм 5 ҡалаһында асылған 34 "шайморатовсылар класы"ның 200-ҙән ашыу укыусыһын сәләмләне һәм ҡотланы.**



Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров балдың Ватан Геройҙарын хөрмәтләп иҫкә алған көндә үтеүен билдәләне.

"Генерал Шайморатовтың яҙмышы һоҡланғыс. Башҡортостан, республикабыҙ өсөн ғорурлана алырҙай геройҙарыбыҙ булыуы ҙур бәхет. Тап ошо маҡсат менән беҙ үҙ ваҡытында "йәш шайморатовсылар" кластарын астыҡ. Улар хәрби тарихты өйрәнергә, республикабыҙҙың һәм илебеҙҙең ысын патриоттары булырға теләгән балаларҙы берләштерә. Йәш шайморатовсы булыу - ул айырым яуаплылыҡ. Уның исеме ғүмерегеҙ буйына һеҙҙе оҙатып барыр. Яҡшы уҡырға, яңы белемгә ынтылырға, спорт менән шөғөлләнергә, әлбиттә, патриот булырға кәрәк. Был көн һеҙҙең хәтерегеҙҙә, ата-әсәйегеҙҙең, уҡытыусыларығыҙҙың хәтерендә ҡалыр тип ышанам. Барығыҙға ла уңыштар, тыныслыҡ, именлек һәм тыуған Башҡортостаныбыҙҙың сәскә атыуын теләйем", - тине Радий Хәбиров.

Ул шулай уҡ 11 уҡыусыға "Йәш шайморатовсы" почет билдәләрен тапшырҙы. Йәш шайморатовсылар композитор Урал Иҙелбаев көйөнә башҡорт вальсын һәм Рим Хәсәновтың "Кышҡы романс" көйөнә вальс бейене.

ҠЫҪҠАСА

# ШЫРШЫ КӨТӘҺЕГЕҘМЕ?

✓ **Башҡортостандың баш ҡалаһында шыршы баҙарҙары 15 декабрҙән эшләй башлай.** Дим районында - "Алтын" сауҙа үҙәге, Киров районында - "Кувыкин" сауҙа үҙәге янында, Совет районында - "Экватор" сауҙа үҙәге ҡаршыһында һәм Һалле тукталышында, Ленин районында - "Йылға арьяғы" сауҙа-сервис комплексы ҡаршыһында һәм Ғафури-Пушкин киҫелешендә, Орджоникидзе районында - "Йүрүҙән" сауҙа үҙәге алдындағы майҙанда, Октябрьскийҙа "Гагарин" сауҙа-сервис комплексы, Спорт һарайы эргәһендә һәм Тәүге уҡытыусы скверы янында, Спорт тукталышының йоп яғында, Рәсәй һәм Кольск урамдары киҫелешендә, шулай уҡ "Корсо" сауҙа-сервис комплексы янында. Баҙарҙар 31 декабргә тиклем эшләй.

✓ **Өфөлә торлаҡты ҡуртымға алыу хаҡы ҡиммәтләнә.** Ноябрь йомғаҡтары буйынса 1 бүлмәле фатирҙы ҡуртымға алыу хаҡы - 24,9 мең һум самаһы, 2 бүлмәле - 33,8 мең һум, 3 бүлмәлеһе - 44,6 мең һум, тип хәбәр итә "Фатирҙар донъяһы" порталы. Октябрь менән сағыштырғанда хаҡтар бер аҙ түбәнерәк, әммә был йыл башына ҡарағанда ҡиммәтерәк. Ғинуарҙа уртаса хаҡтар бер бүлмәле фатир өсөн уртаса 24,2 мең һум, ике бүлмәле өсөн 31 мең һум һәм өс бүлмәле өсөн яҡынса 42 мең һум булған. Бәләкәй фатирҙарҙы ҡуртымға алыу ҡиммәт түгел. Сервис аналитиктары билдәләүенсә, тотош илдә ике ай рәттән ҡуртым ставкалары түбәнәйә. "Куртымға алыусылар юғары түләүҙән баш тарта, сауҙалаша һәм ҡала үҙәгенә алыҫтараҡ урынлашҡан варианттарҙы йәки бәләкәйерәк торлаҡты ҡарарға әҙер", - тип билдәләй платформа экспертары.

✓ **Башҡортостанда 1 ғинуарҙан ҡала яны поездарында юл хаҡы 6-8 процентҡа арта, тиелә республиканың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты ҡарарында.** Кассала билет һатып алғанда тәүге 10 сағрым өсөн хаҡ 29 һумдан 31 һумға тиклем арта, артабан һәр сағрым өсөн 2,9 һумдан 3,1 һумғаса. "Ҡарлуғас"та һәм "Финист"а 34 һумдан 36 һумға тиклем һәм артабан шуға ярашлы. "Рәсәй тимер юлдары пассажирҙарға" ҡушымтаһы аша - ғәҙәти электричкалар 25 һумдан 27 һумға тиклем һәм артабан шуға ярашлы. Хәҙерге составтарҙа иһә 28 һумдан 30 һумғаса. Өфө агломерацияһында юл хаҡы 40 һумдан 45 һумға тиклем ҡиммәтләнә. Дим - Иглин участкаһында билеттың билдәләнгән хаҡы - 35 һумдан 40 һумға ҡәҙәр. Күрше төбәктәрҙең Башҡортостан аша үткән электричкаларында ла тарифтар шулай уҡ күтәрелә.

✓ **Яңы йыл ризыҡ өсөн аҙыҡ-түлек йыйылмаһы уртаса 5 процентҡа ҡиммәтләнгән.** "Чек.Индекс" платформаһы экспертары ноябрҙә оливье индексын иҫәпләп сығарған. Сығымдар элекке "совет" рецепты буйынса дүрт порция өсөн иҫәпләнгән. Бының өсөн 500 грамм картуф, 200 грамм кишер, 5 йомортҡа, 300 грамм бешерелгән колбаса, 100 грамм һуған, бер банка борсаҡ, 400 грамм маринадланған ҡыяр, 200 грамм майонез, 50 грамм укроп йәки петрушка кәрәк. Магазиндағы уртаса хаҡҡа ҡарағанда, йыйылма 575 һум тәшкил иткән (былтырғыға ҡарағанда 5%, йәки 26 һумға ҡыйбат). Картуф, һуған, йомортҡаның хаҡы уҙған йылға ҡарағанда арзаныраҡ, башҡа ингредиенттар бер аҙ ҡиммәтерәк.

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓Республикала ковид менән сирләү осраҡтары арта. Айрат Рәхмәтуллин һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта 95 пациент стационарҙа дауалана, тәүлек эсендә 16 сирле ҡабул ителгән. Ә 664 кеше амбулатория шарттарында дауалана, уларҙың 39-ы бер көндә мөрәжәғәт иткән. Йоғошло сирҙәр госпиталдәрендә 105 койка-урын бар, буш койка фонды 9 процент ашыу тәшкил итә.

✓2026 йылға техниканы баҫыу эштәренә ваҡытында һәм сифатлы әҙерләү маҡсатында Республика Хөкүмәте тейешле бойорок сығарҙы. Документ рәсми порталда донъя күрҙе. Уға ярашлы, тупраҡ эшкәртеү агрегаттары - киләһе йылдың 1 февраленә, тракторҙар, машиналар һәм сәсеү эштәре өсөн ҡорамалдар - 1 апрелгә, үҙйөрөшлө сапҡыстар - 20 майға, комбайндар 1 июлгә тиклем әҙер булырға тейеш.

✓2025 йылда Башҡортостандың кадрҙар үҙәктәре 18 меңдән ашыу кешене эшкә урынлаштырған. "Бөгөн "Рәсәйҙә эш" кадрҙар үҙәктәрендә 10 меңдән ашыу кеше теркәлгән. Шул уҡ ваҡытта мәшғүллек хеҙмәтенең вакансиялар банкында төбәктең эш биреүселәренән 30 меңгә яҡын тәҡдим урынлаштырылған", - ти Республика Халыҡ мәшғүллеге үҙәге - "Рәсәйҙә эш" кадрҙар үҙәге директоры Ридан Әхиәмов. Эшкә урынлашыуҙа комплекслы ярҙамды кадрҙар үҙәгенең теләһә ниндәй филиалында алырға мөмкин.

✓Өфөлә Халыҡ-ара эшҡыуарлыҡ аҙналығы сиктәрендә 18 номинацияла "Йыл эшҡыуары-2025" республика конкурсы еңеүселәре билдәләнде. Сара быйыл 20-се тапҡыр уҙғарылды. Уның маҡсаты - эшҡыуарлыҡ өлкәһендә иң яҡшы тәжрибәне һәм ҡаҙаныштарҙы популярлаштырыу, уңышлы эшләүсе, төбәктең социаль-иҡтисади үҫешенә өлөш индереүсе эшҡыуарҙарҙы асыҡлау. Барлығы 142 ғариза ҡабул ителгән, финалға 50 ҡатнашыусы үткән.

✓2025 йылдың 11 айында Башҡортостан предприятиелары сит илдәргә 57 мең кубометр агас материалдары оҙатҡан. Һатып алыусылар - Әзербайжан, Афғанстан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан, Төркмәнстан һәм Үзбәкстан. Был хаҡта Россельхознадзорҙың БР буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итәләр. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса, хәүефле карантин ҡороҡтостары асыҡланмаған.

✓"Иң яҡшы муниципаль практика" Бөтә Рәсәй конкурсында Бишбүләк районының Каменка ауыл советы, Әбйәлил районының Ташбулат ауыл советы, Дүртөйлө ҡалаһы төрлө номинацияларҙа еңеү яуланы. Дөйөм алғанда, өс муниципалитет 55 миллион һум аҡсалата приз алды. Каменка ауыл советы - 20 млн һум, Ташбулат - 15 млн. һум, Дүртөйлө ҡалаһы - 20 млн һум.

*✓ Лариса Долинаның фатир ғауғаһы тормошобоҙҙоң бөтөн өлкәләренә лә үтеп инген шул алдаҡсылыҡ арҡаһында килеп сыға, ләкин йырсының үҙен нисек тотоуы ысынлап та алданғанмы икәнлегенә шик тә тыуҙырып ҡуя.*



*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

## ВЕТЕРАНҒА - ЭШ УРЫНЫ

**Башҡортостан парламентының йәмәғәт именлеге, хоҡуҡ тәртибе һәм суд мәсьәләләре комитеты "Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы эшкә алыу өсөн квота билдәләү тураһында" закон проектын хупланы.**

Закон проекты МХО биләмәһенән ҡайтҡан хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе эшкә урынлаштырыуға булышлыҡ итеүгә йүнәлтелгән. Республика Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, 100-ҙән ашыу хеҙмәткәре булған эш биреүселәр МХО-ла ҡатнашыусыларҙы мотлаҡ эшкә алыһын өсөн квота билдәләнә. Квота коллективтың уртаса исемлек һанынан 1 процент тәшкил итә. Эш биреүсе хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе туранан-тура, шулай уҡ мәшғүллек хеҙмәте органдары йүнәлтмәһе буйынса эшкә ҡабул итә ала. Парламент спикеры фекеренсә, Ватанды һаҡлаусылар өсөн эш урындарына квота бүлеү - социаль ғәҙеллек мәсьәләһе генә түгел, ә ветерандарҙы граждандар тормошона йәлеп итеү ысулы ла. Ҡайһы бер төбәктәрҙә ошондай практика индерелгән. Башҡортостанда квоталар арҡамында 1100-гә яҡын эш биреүсе хәрби хеҙмәткәрҙәр өсөн биш меңдән ашыу эш урыны булдыра ала. Депутаттар был законды декабрҙә көҙгө сессияның йомғаҡлау ултырышында ҡабул итергә ниәтләй.

## ӨҪТӘП ТӘ ЯРҘАМ

**Дәүләт Думаһы икенсе уҡыуҙа хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләренә өҫтәмә ярҙам тураһында закон проектын ҡараны. Бындай ҡарарҙы Дәүләт Думаһы Советы ҡабул итте, тип белдерҙе рәйес Вячеслав Володин.**

"Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең статусы тураһында" федераль законға сираттан тыш торлаҡ субсидияһы алыуға хоҡуғы булған хәрби хеҙмәткәр категориялары исемлеген киңәйтеү йәһәтенән үҙгәрештәр индерергә тәҡдим ителә. Уға инвалид балаһы булған хәрбиҙәр ҙә инә. "Төбәктәргә үҙ бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләрен торлаҡ менән тәьмин итеү буйынса өҫтәмә ярҙам саралары индереү хоҡуғы бирергә тәҡдим ителә", - тине Володин.

## ХӘТЕРҘӘЛӘР!

**Ватан Геройҙары көнөндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Махсус операция барышында юғары исемгә лайыҡ булған республика хәрби хеҙмәткәрҙәренең, ил Геройҙарының ҡаһарманлыҡтарын иҫкә төшөрҙө.**

Шулай уҡ Башҡортостанда "Батырлыҡ һәм намыҫ байрағы" республика илһөйәрлек марафоны тамамланды. Республикабыҙҙың МХО биләмәһендә хәрби бурыстарын үтәгән исемле батальондары байраҡтарын тапшырыу эстафетаһына Өфөлә нөктә ҡуйылды. Ватан Геройҙары көнөндә, Өфөнөң 88-се мәктәбе кадеттары байраҡтарҙы ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев исемендәге кадет корпусына һаҡлауға тапшырҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, марафон быйыл февралдә старт алды. Башҡортостандың хәрби подразделениелары байраҡтары йыл дауамында республиканың барлыҡ район һәм ҡалалары мәктәптәрендә булды. Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, шулай уҡ Махсус операция ветерандары һәм уларҙың ғаиләләре ҡатнашты. Республика етәксеһе һәммәһен дә байрам менән ҡотланы һәм ошо көндөң мөһимлеген билдәләне.

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ДӨЙӘ ТҮГЕЛЛЕГЕНДЕ ИҪБАТЛА!



**Һуңғы ваҡытта Рәсәйҙең фатир һатыу-һатып алыу баҙарында, эксперттар әйтмешләй, ысын мәғәнәһендә "төп башына ултыртыу эпидемияһы" хакимлыҡ итә. Фатир алдаҡсылары арҡаһында аҡсаһын да, торлағын да юғалтыусылар күп, ә судтар, яуыз уй менәнме, әллә муттар йоғонтоһона бирелепме, алданған фатир һатыусыны яҡлай.**

Фатирын һатырға йәки киреһенсә, һатып алырға теләгән кешеләр хәҙер икенсел торлаҡ баҙарында пәйҙә булған "Долина схемаһы", "Долина эффекты" тип аталған күренештән ҡурҡып, ниәттәренән кире ҡайталар. Рәсәйҙең халыҡ артисы, танылған йырсы Лариса Долинаның фатир ғауғаһы әлеге лә баяғы тормошобоҙҙоң бөтөн өлкәләренә лә үтеп инген шул алдаҡсылыҡ арҡаһында килеп сыға, ләкин йырсының үҙен нисек тотоуы артабан уның ысынлап та алданғанмы икәнлегенә шик тә тыуҙырып ҡуя, сөнки уға ҡарата был тарих "һарыҡтар ҙа иҫән, бүре лә тук" тигән әйтемде иҫкә төшөрә. Үҙҙәрен "ФСБ хеҙмәткәрҙәре" тип таныштырған телефон мошенниктары йоғонтоһонда Долина, үҙе раҫлауынса, миллиондарын юғалта һәм әлеге муттар ҡушыуы буйынса баш ҡала үҙәгендәге элиталы фатирын Полина Лурьеға 112 миллион һумға һатып ебәрә. "Аралашсы" ролендәге алдаҡсылар кәңәшенә лә "хеҙмәттәре" өсөн байтаҡ аҡса кереп ята һәм улар артабан Долинаның икенсе фатирына ла күҙ һала. Күп тә үтмәй, Долина үҙенең бурҙар йоғонтоһона бирелгән булыуын дәлилләп, судҡа мөрәжәғәт итә һәм һатыу-һатып алыу килешеүен юҡҡа сығарылыуҙы талап итә. Суд Долинаны яҡлап ҡарар сығара һәм уға фатирын кире ҡайтара, ә бына намыҫлы һатып алыусы булараҡ, алдаҡсылар схемаһы хаҡында бер ни белмәгән Полина Лурье бер нәмәһеҙ тороп ҡала. Уның йә түләнгән аҡсаһын, йә фатирын ҡайтарыуҙы юллап судҡа биргән мөрәжәғәттәре кире ҡағыла: суд тарафынан матди зыянды ҡаплатыу әлеге алдаҡсыларҙан талап ителеүе мөмкин, тип билдәләнә. Тимәк, батып барыусыны ҡотҡарыу - батыусының үҙ эше тигәндәй килеп сығамы? Ә шул уҡ ваҡытта икенсе яҡ, мәҫәлән, Лариса Долина һис бер ыҗдан ғазабы кисермәйенсә, фатирын да ҡайтара, Полинаның аҡсаһын да кеҫәһенә һала. Ғәҙел суд шулай буламы?

Киң йәмәғәтселек һәм хатта Дәүләт Думаһында ла Полинаға аҡсаһын ҡайтарып биреүҙе талап итәләр. Бөтөн юристар берҙәмлеге бөгөн ошо һәм ошоға ҡағылышлы материалдарҙы өйрәнә, фекер алыша һәм бәхәсләшә. Юристар билдәләүенсә, Долина-Лурье эше буйынса суд ҡарары хоҡуҡи ғәмәлиәттә типик күренеш түгел, шуға күрә был осраҡҡа ҡарата РФ Юғары судтың аңлатмаһы кәрәк.

Ысынлап та, Рәсәйҙең хоҡуҡи даирәләрендә танылыуынса, хәҙерге көндәрҙә фатир һатыу-һатып

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

***Һеҙ ҡайҙа тукланаһығыҙ, организмға зарарлы фастфудты, башҡа сит ил ризыҡтарын ашайһығыҙмы, тип бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттек.***

***Әлфиә СӨЛӘЙМӘНОВА, өс бала әсәһе:*** Өйҙә, үҙ ҡулдарың менән, нимәләр һалғаныңды белеп бешергән ашҡа бер ни ҙә етмәй инде ул. Һәр ваҡыт аҙыҡты төрлөләндерергә тырышам: һурпа, төрлө аштар, газ мейесендә быҡтырылған тауыҡ йәки башҡа ит һ.б. Барыбыҙ ҙа эш кешеләре, ваҡыт булмай киткән саҡтар була, шуға күрә пирожки, өсмөйөштәр кеүек ҡамыр аштарын алдан эшләп, туңдырып ҡуям. Өҫтәлебеҙҙә һәр ваҡыт емешеләк бар, бигерәк тә алма. Турап ултыртып ҡуйһаң, балалар йәйләп ашап йөрөй, печенье, кәнфит кеүек тәм-томға ла иҫтәре бик китмәй. Әйткәндәй, печенье йә икмәкте лә кибеттәрҙән түгел, ә икмәкханаларҙан алырға тырышабыҙ. Был осраҡта составы мөмкин тиклем тәбиғи була.

Фастфудҡа килгәндәме? Балаларҙы һәр ваҡыт тыйып тороп булмай бит инде. Онотҡанда бер булһа ла үҙебеҙҙең күңелде күреп алабыҙ. Тик был осраҡта ла бер нисә шарт бар: алған аҙыҡтарыбыҙ "ысын" иттән һәм хәләл булырға тейеш. Балаларға кетчуп, майонезлы әҙерәк йә бөтөнләй һалмауҙарын айырым һорап та була. Өфөлә һуңғы йылдарҙа тап хәләл кафе, ресторандар асылыуы ҙур ҡыуаныс. Суши, роллы кеүек Азиянан килгән ашамлыҡтарға ла ҡаршы түгелмен. Йылына бер ашарға була уныһын да.

Һәм инде минең иң яратҡаным - ул ҡәһүә. Мин унан бер ҡасан да баш тарта алмаясаҡмын, ахыры. Ҡәһүә тигәс тә, һүҙем гранулалы, әҙер эсемлек хаҡында түгел, ә ваҡлап, ҡайнатып эсә торғаны хаҡында.

***Нәркәс КӘЙЕПҠОЛОВА, табиб, диетолог:*** Иң төп тукланған ризыҡ - ул йәшелсә, емеш-еләк, ҡатмарлы углеводтарға, аҡһымдарға бай аҙыҡ. Һәм, әлбиттә, рационға майҙарҙы ла ҡушам. Тап ошо аҙыҡтар беҙ ғаиләбеҙ менән ҡулланған "минең тәрилкә" тигән формулаға инә. Был формула буйынса йәшелсә-емештәр беҙҙең тәрилкәбеҙҙең яртыһын, дүрттән берен - аҡһымдар, ә ҡалған өлөшөн ҡатмарлы углеводтар алырға, дөйөм колораждың 20-30 процентын майҙар тәьмин итергә тейеш.

Фастфудтарҙы, әлбиттә, ашайым. Беҙ ҡәтғи диетала түгел, ваҡыты менән үҙебеҙгә төрлө тәмлекәстәр, "тыйылған" аҙыҡтарҙы ла рөхсәт итеп алабыҙ. Организмыбыҙға йыш ашаған аҙыҡ ҡына тәьҫир итә, шуға күрә, үҙемде алғанда, бер-ике айға бер бургер, суши, пицца кеүек фастфуд менән үҙемде һыйлап алам.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Бөрйән районының Тимер ауылында яңы ФАП асылды. Ул заманса талаптарға һәм стандарттарға ярашлы төҙөлгән. Халыҡҡа сифатлы медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн тейешле ҡорамалдар менән тәьмин ителгән, хеҙмәткәрҙәргә уңайлы эш шарттары булдырылған. Һанлы медицина хеҙмәттәре күрһәтеү мөмкинлеге лә бар. "Фельдшер-акушер пункты Тимер ауылында йәшәгән 269 кешегә медицина ярҙамы күрһәтәсәк", - ти фельдшер Розалия Мырҙабаева.

✓2026 йылда Рәсәй Театр эшмәкәрҙәре союзы үҙенең 150 йыллығын билдәләй. Ошо юбилей датаһы айҡанлы "Театр поезы" Бөтә Рәсәй сараһы үтә. Театр артистары менән поездар 2026 йылдың майында Владивосток - Мәскәү һәм Севастополь - Мәскәү маршруттары буйынса сәйәхәткә сыға. Театр марафоны Рәсәйҙең 43 ҡалаһын үҙ эсенә ала. Севастополь-Мәскәү маршрутында Өфө туҡталышы ла бар. Июнь айында ике поезд да бер үк ваҡытта Мәскәүгә килә.

✓2026 йылдың 1 ғинуарынан ата-әсәләр балалары сәнғәт өлкәһендәге федераль белем биреү ойошмалары, шул иҫәптән балет мәктәптәре интернаттарында йәшәүе һәм тукланыуы өсөн түләмәй. Тейешле документты Дәүләт Думаһы депутаттары ҡабул итте. Закон төрлө төбәктәрҙән һәләтле балаларға ярҙам итеүгә, уларҙың ғаиләләренә, айырыуса ишле һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә финанс йөкләмәһен кәметеүгә, шулай уҡ йәшәгән урынға һәм килемгә ҡарамаҫтан, сәнғәт өлкәһендә сифатлы белем алыу өсөн тигеҙ мөмкинлектәр булдырыуға йүнәлтелгән.

✓Яңы йыл башланыр алдынан Башҡортостан райондарында "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проекты сиктәрендә төҙөлгән алты яңы поликлиника асыла. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә вице-премьер Рөстәм Ғәзизов белдерҙе. "Был аҙнала Благовещенда һәм Аҫҡында поликлиникалар асылыуы ихтимал. Бер аҙна ярымдан - Учалыла һәм Яңауылда. Декабрь аҙағында - Баҡалыла һәм Аҫҡарҙа. Иң һуңғыларҙан булып Әбйәлил районындағы учреждение асыла, унда эштәр байтаҡ", - тине вице-премьер. Билдәле булыуынса, Аҫҡын поликлиникаһын асыу тантанаһында Рәсәй Хөкүмәте вице-премьеры Татьяна Голикова һәм федераль һаулыҡ һаҡлау министрлығы башлығы Михаил Мурашко ҡатнаша.

✓МХО-ла ҡатнашыусылар икенсе белем алырға мөмкин. Дәүләт Думаһы пленар ултырышта икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа тейешле үҙгәрештәр ҡабул итте. Парламент спикеры Вячеслав Володин билдәләүенсә, ҡайтҡан хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе эшкә урынлаштырыу һәм яңынан уҡытыу мөһим мәсьәләләрҙең береһе булып тора. "Үҙебеҙҙең яҡтан бының өсөн бөтә шарттар булдырырға тейешбеҙ. Махсус хәрби операция башланғандан алып бөтәһе 148 закон ҡабул ителде", - тип белдерҙе Вячеслав Володин.

✔ ***Йәштәрҙең һаулыҡ торошо хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе Германия властары мотлаҡ хәрби хеҙмәтте тергеҙеү маҡсатында файҙаланасаҡ, ә немецтар хеҙмәт итергә теләмәй.***



алыу мәсьәләһе ҡатмарлаша бара. Шул арҡала граждандарҙың ҡайһы берҙәре фатир һатып алыуҙың альтернатив юлдарын һайлай икән, ләкин был юлда ла уларҙы хәүеф һағалай. Яуызлыҡ менән ҡомһоҙлоҡтоң иге-сиге юҡ. Ни булды был заманға? Ҡайҙан табылып тора боҙоҡ уйлы әҙәмдәр? Өфөлә йәшәүсе "эшҡыуар" Римма Барсегян, мәҫәлән, тап ана шул "альтернатив" юл менән егермеләгән кешене аҡсаһыҙ ҙа, торлаҡһыҙ ҙа ҡалдырған. Дүрт йыл бер нисә... ниндәй һөҙөмтәһеҙ көткәндән һуң алданған граждандар Барсегянды судҡа бирә. Суд уларҙы яҡлап сығарған... ғә һәм юлламаны ҡәнәғәтләндерә. Ләкин бер йыл инде суд приставтары эшҡыуарҙы йә таба алмай, йә зыянды ҡаплата алмай икән.

Был хәлдән алдараҡ Өфөлә полиция тағы бер алдаҡсы эшҡыуарҙың ҡойроғона баҫҡан һәм кешеләрҙең ышанысына инеп, уларҙы тәҙәлөш бизнесына ҡушылырға өндәп, 300 млн һумға "төпкә ултыртҡан" 46 йәшлек Венера Мөхәмәҙиеваны ҡулға алған. Зыян күреүселәрҙән һәм полициянан эҙ яҙҙырыу маҡсатында ул хатта исем-фамилияһын үҙгәртеүгә тиклем барып еткән.

Kommersant.ru сайтында яҙылып сығыуынса, бөгөнгә көндә алдаҡсылар йортонһонда торлағын һатыусы йә иһә уларға аҡса биреүселәрҙең юлламалары буйынса илдәге судтарҙа 5,8 мең эш ҡарала. Был йәһәттән мираҫ милке, ир йә ҡатындың торлаҡ өлөшө, Әсәлек капиталын түләү менән бәйле күсемһеҙ милек өлкәләре граждандарҙан айырыуса һаҡ булыуҙы талап итә, сөнки судтар һаман да әлеге "Долина ғауғаһы" схемаһы буйынса эш итә һәм алданған һатып алыусы ҙур зыян күрә. Ә шулай ҙа, бәхеткә күрә, хоҡуҡи ғәмәлиәт тә әкренләп үҙгәрә бара: Рәсәйҙең бер нисә суды намыҫлы һатып алыусыны яҡлаған ҡарар сығарған, тиҙәр. Тик был алдаҡсылыҡ һаҙлығында батмай ҡалған бер нисә генә бәхетленең өлөшө. Бәхетле тиһәң дә дөрөҫ булмаҫтыр: үҙенең хаҡлығын, намыҫлы һатып алыусы булыуын, бер кемде лә алдамауын, ә һатыусыға ышанып, аҡсаһын түләүен - ҡыҫҡаһы, үҙенең "дөйә түгеллеген" иҫбатлау өсөн уларға ниндәй генә дәлилдәр табырға тура килмәгәндер! Ә бит ҡайһы бер юристар әйтеүенсә, аҡсаны ла, милекте лә килешеү тәҙөгән яҡтарға бер үк ваҡытта кире ҡайтарыу механизмын индереп, алдаҡсылыҡты юҡҡа сығарыу мөмкин булған эш! Хоҡуҡи тел менән әйткәндә, был механизм ике яҡлы реституция тип атала икән. Улайһа, йылдар буйына һуҙыла килгән торлаҡ-аҡса темаһына был енәйәтселекте тамырынан юҡ итеү өсөн нимә һуң сара күрелмәй? Торлаҡһыҙ ҙа, аҡсаһыҙ ҙа урамда ҡалған бер ғәиепһеҙ намыҫлы алданыусыны кем яҡлар?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# УРТАҠ КҮТӘРЕРҘӘЙ КӨС КӘРӘК

**Германияның алдынғы ҡарашлы йәштәре канцлер Фридрих Мерц сәйәсәтенә ҡаршылыҡ белдереп, урамдарға сыҡты, тип яҙа Новости Рәсәй мәғлүмәт агентлығы.**

Студенттар һәм мәктәп үҫмерҙәре канцлерҙы яратмай, уларға Рәсәй менән конфликт оҡшамай, улар шулай уҡ ҡоралланыуға, һуғышҡа ҡаршы. Ә иң оҡшамағаны - бундестагтың көн-төн Рәсәй менән һуғыш башланыуынан ҡурҡытып, егеттәрҙе мотлаҡ медкомиссияға мәжбүр итеүе. Йәштәрҙең һаулыҡ торошо хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе Германия властары мотлаҡ хәрби хеҙмәтте тергеҙеү маҡсатында файҙаланасаҡ, ә немецтар хеҙмәт итергә теләмәй. Йәштәр үҙҙәренең имен киләсәген Мерц урламаһын өсөн көрәш алып барырға теләй.

Ошо хәрәкәткә хатта Мерцтың үҙ партияһы - Христиан-демократик союздың парламентта 18 урын алып торған йәштәр бүлеге лә ҡушылып китте. Уларҙың талабы пенсияны уртаса эш хаҡынан 48 процент кимәлендә индексациялау буйынса яңы закон проектына ҡағыла, сөнки илдә әҙ һанда ҡалып килеүсе йәштәргә һалым түләүе ауыр бурысҡа әүерелеүе ихтимал. Гөмүмән, һуң булмаҫ борон Мерцты туҡтатырға кәрәк, тигән фекер үткәрелә, сөнки әлеге ваҡытта ул ендәрен төрәп, Рәсәйҙең суверенлы активтарын ҡулға төшөрөү, бүлгеләү ниәте менән яңа һәм банкында Рәсәй аҡсалары һаҡланыусы Бельгияны ҡоторҙоп маташа. Ошо бысраҡ, оятһыҙ уғрылыҡ планына ул миллә́ттәше - Еврокомиссия башлығы Урсула фон дер Ляйенды ла үҙ яғына ауҙармаҡсы. Ә үҙенең иле намыҫы һәм абруйы өсөн тырышыусы Бельгия премьеры Барт де Вевер парламент алҡышлауҙары аҫтында Мерц һәм уның әшнәләре планына "арыҫландай" ҡаршы тора, тип яҙа журналист Дмитрий Бавырин.

Был йәһәттән тағы ла Дональд Трамп хакимиәте яҡлауына өмөт итергә булалыр, сөнки Аҡ йорт Евросоюз тарафынан Рәсәй активтарын конфискациялауға әлегә ҡаршы: Трампты берлектәге Рәсәй-Америка проекттары менән ҡыҙыҡһындырыуға өлгәшелде. Өҫтәүенә, Мәскәү һәм Вашингтон Украина конфликтын оҙайлы көйләүгә йүнәлтелгән план буйынса эшмәкәрлекте дауам итә. 2 декабрҙә Мәскәүҙә Америка яғы вәкилдәре - АҠШ президентының махсус илсеһе Стив Уиткофф, шулай уҡ Трамптың кейәүе, бизнесмен Джаред Кушнер Рәсәй Президенты Владимир Путин менән осрашты. Америка лидеры тәҡдим иткән тыныс көйләү планы буйынса биш сәғәткә һуҙылған һөйләшеүҙәр эшлекле кимәлдә үтте, тип баһалаңы осрашыуҙы Рәсәй Президенты ярҙамсыһы Юрий Ушаков. Әлегә ауырыраҡ ҡабул ителеүсе пункттарҙы яраштырыу бара, ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса план документында АҠШ-тан тамырынан үҙгәртеүҙәргә барыу талап ителә, шуға күрә әлегә тота килеп килешеү хаҡында һүҙ алып барылмай. Донбасс Халыҡ Республикаһының Киев контролендә ҡалып килгән 20 процент территорияһы ла бәхәс тыуҙыра. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй Сит ил эштәре министрлығы менән АҠШ-тың Дәүләт департаменты белгестәре ҡатнашлығынан тыш, Украина конфликтын тыныс көйләү мөмкин дә булмаясаҡ, тине президент ярҙамсыһы һәм ошо осрашыуҙан һуң ике яҡ та бер-береһе ҡараштарын яҡшыраҡ аңлауға өлгәште, тип өҫтәне. Үҙ сиратында Дональд Трамп та илсе вәкилдәренең Путин менән осрашыуын һыңғай баһаланы. Украина яғы өсөн көйләү документындағы иң төп ҡатмарлы мәсьәләләр ҙә аталды: территориялар, Рәсәй активтарын файҙаланыу һәм хәүефһеҙлек гарантиялары.

Шул да мәғлүм булһын: 5 декабрҙә Аҡ йорт АҠШ-тың тышҡы сәйәсәт нигеҙҙәрен билдәләүсе милли хәүефһеҙлек буйынса яңы стратегияһын ҡабул итте һәм баҫып сығарҙы. Эксперттар фекеренсә, ул күп йәһәттән Мәскәү ҡараштарына тап килә; унда Рәсәйгә ҡарата тәнҡит юҡ һәм Украина конфликтын көйләү стратегия өҫтөнлөктәренең береһе иҫәпләнә. Ә бына Европанан был документта үҙ хәүефһеҙлектәре өсөн үҙҙәренә яуаплылыҡ алыуы талап ителә. АҠШ-тың яңы стратегияһында Украина конфликты буйынса Аҡ йорттоң Евросоюз чиновниктары менән фекер айырымлыҡтары асыҡтан-асыҡ белдерелә.

Рәсәй АҠШ стратегияһының диалог ҡороуға ынтылышын хуплап ҡабул итте. РФ Хәүефһеҙлек советы рәйесе урынбаҫары Дмитрий Медведев, яңыртылған стратегияһында Вашингтон бөтөн донъя уның иңендә генә ятмауын таныны, хәҙер ул ошо ауыр бурысты уртаҡ күтәрерҙәй көстәрҙе эҙләй, тип яҙҙы үҙенең Мах платформаһы каналында. Европа лидерҙары Америка баҫымы аҫтында Зеленскийҙың украин ғәскәрен Донбастан сығарырға мәжбүр булыуын юҡ ҡуймаҫҡа план ҡора, ә инде, әгәр Трамп тыныс килешеүгә өлгәшә алмаған хәлдә, уның бөтөн был проблемаларҙы Европаға ҡалдырып, "һуғыш темаһы"нан сығып китеүенән дә хәүефләнә, сөнки ул саҡта Европа хәрби һәм финанс йәһәттән Украинаға терәк була алыры икеле.

Махсус хәрби операция барышы Рәсәй Ҡоралы Көстәренең ВСУ ғәскәрҙәрен әүҙем ҡыҫырыҡлауға алыу шарттарында дауам итә. Украина армияһы тере көстәрен һәм хәрби техникаһын күпләп юғалта бара, дошман һалдаттары яу ҡырын ташлап ҡаса. Рәсәй яугирҙары Украинаның 60-лаған объектына көслө ут асты. Ҡыҫҡаһы, Украина утһыҙ ултыра, ә Рәсәй Ҡоралы Көстәре Днепрға ынтылыш ала. Рәсәй армияһы хәҙер яуҙа танк колонналарын файҙаланыуҙан туҡтап, ҙур булмаған төркөмдәр менән эш итеүгә күсте. Красноармейскиҙы яулағанда тап ошо тактика уңышлы ҡулланылғайны. Британия эксперттары был алымдың хәрби хәрәкәттәрҙәге яңылыҡ булыуын билдәләне. Аналитиктар әйтеүенсә, бындай стратегия төркөмдәрҙе дошман дрондарынан һаҡлай.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

---

Һирәкләп ашағанда фастфудтың зыяны юҡ, үтә мауыҡмаҫҡа, сама белергә генә кәрәк.

Алдан әйтеүемсә, көндәлек рационға ингән ризыҡтарҙың беҙгә йоғонтоһо күберәк, шуға ла, иң мөһиме, көн һайын ашаған аштарыбыҙ файҙалы матдәләргә бай булырға тейеш.

***Илнур ӘХМӘТОВ, математика уҡытыусыһы:*** Бер нисә йыл элек, ашҡаҙаным ауырта башлағас, фастфуд кеүек зарарлы ашамлыҡтарҙан, газлы эсемлектәрҙән бөтөнләй баш тартырға тура килде. Элегәрәк бик мауыға инем шул, еңел бит: сыҡтың да алдың, плита алдында торорға ла кәрәкмәй. Бер үҙәккә үткәс, үтә ҡаты диетала булмаһам да, ҡурылған, майлы, тоҙлоборосло, әсе ризыҡ ашамайым инде. Ирткәнсәк һәр ваҡыт бутҡа, дөйөм рационда күберәген аштар, тауыҡ ите, бешерелгән йәшелсә, әҙләп емеш-еләк. Эшемә ҡағылышлы, төшкө аштар мәктәп ашханаһында үтә, ә унда туҡланыу һәр ваҡыт баланслы, ул яҡтан енелерәк.

Тәүге осор диетаға өйрәнеп китеү ауыр булды, әлбиттә. Тыйылған булһа, пицца-бургерын, кәнфит-печеньеһын да ашағы килә. Бигерәк тә табала ҡурылған, кетерләп кенә торған бәрәңге төшкә инеп бер булды. Күнмәй ҡайҙа бараһың? Хәҙер инде файҙалы аҙыҡты тәмле килеп сығырлыҡ итеп, төрләндереп бешерергә лә, үҙемде контролдә тоторға ла, режим менән йәшәргә өйрәндем.

Беҙҙең заман - ул тиҙлектәр заманы, барыһына ла өлгөрөргә тырышып, күптәр хатта ашауҙы ла онота. Шуның өсөн кешеләргә, бигерәк тә йәштәргә, был йәһәттән иғтибарлы булырға кәңәш итер инем. Сөнки бындай тормоштоң касафаты шунда уҡ түгел, ә ваҡыт үткәс кенә беленә.

**Айһылыу ДАУЫТОВА яҙып алды.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Черниковск ҡалаһының (хәҙер Черниковка - Өфөнөң төньяҡ өлөшө) баш архитекторы Маргарит Куприяноваға һәйкәлде декабрҙә ҡуйыу планлаштырыла. Был турала тура бәйләнеш ваҡытында республиканың баш ҡалаһы мэры Ратмир Мәүлиев белдерҙе. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, был донъяла ҡатын-ҡыҙ архитекторға беренсе һәйкәл булмаҡсы. Һәйкәл проектын - Башҡортостандың атҡаҙанған архитекторы Дмитрий Винкельман, һәйкәлдең эш моделен Рәсәйҙең атҡаҙанған рәссамы Хәниф Хәбибрахманов тәҡдим итте. Скульптураны Черниковск ҡалаһының баш архитекторы исемен йөрөткән скверҙа, Первомайская һәм Ульянов тар урамдары сатында ҡуйыу планлаштырыла.

✔Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Ирекмәндәр көнө алдынан баш ҡала уҡыусыһы Полина Дудконы "Хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән бүләкләне. Ҡыҙ ирекмәнлек эшмәкәрлеге менән әүҙем шөғөлләнә, МХО-ла ҡатнашыусыларға ярҙам үҙәген ойоштороусы ла ул. Шулай уҡ маскировка селтәрҙәре үреүҙә, окоп шәмдәре эшләүҙә ҡатнаша, кәрәкле материалдар һатып алыу өсөн аҡса йыйыуҙы ойоштора. Күптән түгел Полина әләсәһе менән азат ителгән биләмәләргә барып ҡайтҡан. Ул хәрбиҙәрҙең шиғырҙарын уҡый, видеоға төшөрә һәм социаль селтәргә һала.

✔Төп ҡышҡы тылсымсының сәйәхәте башланды ла инде. Ҡыш бабай поезы 19 ноябрҙә Владивостоктан юлға сыҡты. Ул үҙенең маршрутын 11 ғинуарҙа Бөйөк Устюгта тамамлай. Был ваҡыт эсендә әкиәти состав, 20 мең километрҙан ашыу юл үтеп, илдең 70 ҡалаһында туҡтарға тейеш. Йәкшәмбе, 14 декабрҙә, поезд Өфөгә килә, программа сәғәт 11-ҙән 5-кә тиклем була. Икенсе көндө, 15 декабрҙә, иртәнге сәғәт 11-ҙә поезды Стәрлетамаҡта ҡаршы алалар. Ул киске 8-се 10 минутҡа тиклем перронда тора. Һәр ҡалала ҡунаҡтарҙы бай программа көтә.

✔Өфөнөң Мәғариф идаралығы мәғлүмәте буйынса, 5 декабрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төбәк-ара олимпиаданың муниципаль этабы ойошторолдо. Унда баш ҡала һәм дәүләт дөйөм белем биреү учреждениеларының 7-11-се кластарынан 500-ҙән ашыу уҡыусы ҡатнашты. Олимпиада призёрҙары һәм еңеүселәре дипломдар менән бүләкләнде, ә 9-11-се кластар араһында еңеүселәр һәм призерҙар интеллектуаль ярыштарҙың киләһе этаптарында баш ҡала исеменән сығыш яһай.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Телдең ҡулланылыш даирәһен киңәйтмәй тороп, алға китеш булмаясаҡ. Бында иһә, аныҡ сараларҙы власть органдары күрергә тейеш. Мәсәлән, дәүләт учреждениеларында эшләгәндәргә тел белгән өсөн эш хаҡына 15 процент өҫтәү.*



*ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ*



# МОРАҘЫМ ТАРЛАУЫҒЫ

Мораҙым тарлауығы - Оло Эйек йылғаһы үҙәнен ике яҡлап ҡыҫып алған ҡаяларҙан хасил. Мәғрүр матурлығы уның әкиәттәге кеүек ғәжәип һәм сағыу. Шуға ла Башҡортостан һәм күрше төбәктәр туристары араһында ғына түгел, ә бөтә Рәсәйҙә киң билдәле ул.

Тыуған төйәгебеҙҙең хозур был урыны 1998 йылда "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы тип иғлан ителгән. Әйткәндәй, республикабыҙҙа улар бишәү - "Ирәмәл" (Көньяҡ Уралдағы иң бейек түбәләрҙең береһе, изге тау иҫәпләнә), "Асылыкүл" (Башҡортостандағы иң ҙур күл, "Заятүләк һәм Һыуһылыу" эпосында ваҡиғалар уның тирәләй бара), "Кандракүл" (ҙурлығы буйынса Башҡортостандағы икенсе күл), "Еҙем" (Ғафури районы биләмәһенән аҡҡан йылға. Уның тирәләй 68 мәмерйә иҫәпләнә). Дәүләт тарафынан ҡурсаулыҡтар кеүек һәр йәһәттән ныҡлы һаҡланһа ла, тәбиғи парктар биләмәләре законлы нигеҙҙә туризм һәм әүҙем ял өсөн киң файҙаланыла.

Мораҙым тарлауығына асфальт юл Мораҡ аша ята. Район үҙәгенән Мораҙым (3-сө Юлдыбай) ауылына тиклем - 22 саҡрым. Автобустар һирәк йөрөгәнлектән, үҙ машинаң менән барыу хәйерлерәк.

Тәбиғи паркка инеү түләүле. Билетты урында кассанан алырға ла, алдан онлайн түләп ҡуйырға ла мөмкин. Балаларҙы, хаҡлы ялдағыларҙы һәм ҡайһы бер башҡа льготалы категорияға ҡараған туристарҙы бушлай үткәрәләр. Йыйылған аҡса парк биләмәһен тәртиптә тотоу, сүп-сарҙы йыйыу һәм сығарып түгеү өсөн тотонола икән.

Ингән урында ҡуртымға палатка, йоҡлай торған тоҡ, өрөп тултырмалы кәмә алырға мөмкин. Хаҡтары "тешләшмәй". Йылға буйында дүрт кешегә иҫәпләнгән йорттар урынлашҡан. Шунда уҡ шешлек бешереп һыйланырға, алыҫ түгел ятҡан йылға ярынан балыҡ ҡармаҡларға мөмкин.

Биләмәнән ситтә "Урман әкиәте" тип аталған турбаза үҙ эшмәкәрлеген йәйелдергән. Унда шарттар ҡалалағыса, һәм, әлбиттә, түләү ҙә юғарыраҡ.

Паркта палатка ҡороу өсөн айырым майҙансыҡтар бар. Уларҙы ултырып ял итеү, ҡапҡылап алыу өсөн өҫтө ябыулы эскәмйәле өҫтәлдәр буйынса табырға мөмкин. Һәр ҡайһыһында усаҡ яғыу, ашарға бешереү урындары билдәләнгән. Башҡа ерҙә ут яғыу ҡәтғи тыйылған. Был тәртипте боҙоусыларға ҙур штраф менән янайҙар. Шулай уҡ ағас ботаҡтары һындырырға, үләндәр, сәскә йыйырға ла ярамай.

Ғәҙәттә, туристар билдәләнгән һуҡмаҡтарҙан йөрөй, хәүефһеҙлек талаптары күҙлегенән сығып, уларҙан ситкә тайпылмаҫҡа тәҡдим ителә. Үрҙән ялтырап ятҡан борма-борма Оло Эйек йылғаһы, уны киҫеп үткән (дүрт урында) тапалған юл, ҡаялы тауҙар теҙмәһе күренә

Саф һыулы сылтырап аҡҡан йылға, ике яҡлап диуар булып күтәрелгән ҡаялар теҙмәһе, урман - Мораҙым тарлауығының көн битендәге күҙ күреме ерҙә йәйрәп ятҡан үҙенсәлекле матурлығы, ә һулап туйғыһыҙ һауаһы, ҡоштар тауышы шифаһы һәм биҙәге булһа, данын тағы ла кинерәк тараткан ер аҫты донъяһы ла бар уның. Тәбиғи парк биләмәһендә барлығы 46 мәмерйә асыҡланған. Уларҙың һәр береһе - үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ.

Боронғо Мораҙым мәмерйәһендә (икенсе төрлө - Ҡоромло тип тә йөрөтәләр уны) мезолит дәүерен аҙағы, неолит башы, йәғни 8 мең йыл элек йәшәгән кешеләр төшөргән һүрәттәр табылған. Үкенескә ҡаршы, бик күптәре ҡором аҫтында (икенсе исеме шунан килә) ҡалып юҡ булған. Ә Күгәрсендәр Ҡыуышлығы мәмерйәһе тәүтормош кешеләре торағы булараҡ хеҙмәт иткән. Был хаҡта табылған археологик ҡомарҡтылар һөйләй. Яңы Мораҙым мәмерйәһе иһә бик оҙон (1850 метр) һәм ул ҡатлы-ҡатлы эҙбиз юшҡыны хасил иткән мөғжизәле юлаҡтар, һындар, таштар менән биҙәлгән, тәбиғәттең бай фантазияһы үҙенә башҡа сихри ер аҫты донъяһы хасил иткән шулай. Боҙло мәмерйәлә йыл әйләнәһенә боҙ ята.

Ҡыр күгәрсендәре оя ҡорғанға Күгәрсендәр Ҡыуышлығы тип йөрөтөлгән мәмерйәне, ғәҙәттә, күрмәй ҡайтмай Мораҙым тарлауығына килгән кеше. Ул башҡаларынан яҡынығаҡ та (паркка ингән урындан - 2,5 км), хәүефһеҙерәк тә. Ауыҙы ҙур - 18 метр киңлектә һәм 3 метр бейеклектә. Ҡыуышлыҡ ошо миҡдарҙа 20 метрға тиклем төпкә һуҙыла. Артабан, 2 метр оҙонлоғондағы тар үңәсте үткәс, икенсе залға барып сығаһың. Телегең булһа, ер аҫты сәйәхәтен үргә тартҡан ошо коридор буйлап дауам итергә мөмкин. Ҡайҙа ла аяҡ аҫтында балсыҡ, төрлө ҙурлыҡтағы таштар аунап ята.

Эргәһендәге Боронғо Мораҙым мәмерйәһен дә ҡарамай китеү дөрөҫ булмаҫ ине. Уның ауыҙы тимер рәшәткә менән ябылған, мәмерйәгә экскурсия менән генә эләгергә мөмкин. Сөнки ҡараңғы тар таш коридор (киңлеге - 1,6, бейеклеге - 2,4 метр) буйлап сәйәхәт ер аҫты донъяһының үҙенсәлектәрен белмәгән кеше өсөн үтә лә хәүефле.

Боронғо Мораҙым мәмерйәһе тәүҙә тар ғына, ә 45 метр алға үткәс, киңлеге - 4, бейеклеге 24 метр булған галереяға юлығаһың. Артабан китер өсөн, 16 метр бейеклектәге текә стенаға менергә кәрәк. Быны тик махсус арҡандар ярҙамында ғына башҡарып була. Әгәр инде был ҡаршылыҡты ла артылһаң, мәмерйәнең бер нисә ҡулсаға айырылыуын һәм уларҙың һәр ҡайһыныһы таш тоҡ рәүешле тамамланыуын белерһең.

**Байгилде МОТАЛЛАП әҙерләне.**

*ТУҒАН ТЕЛЕМ*

**"Беҙ, бөгөнгө быуын башҡорттары, телебеҙ үлеүен күҙәтәбеҙ - аянылсы тарихи күренештең шаһитыбыҙ. Күҙәтеүҙәргә нигеҙләнеп, 25-30 йылдан ижтимағи тормошта башҡорт теле эпизодик күренеш кенә булып ҡалмағайы, тип уйлайым". Гәзитебеҙҙең 31-се һанында баҫылған "Оло бер рухи байлыҡтан мәхрүмләмәйек сабыйҙарҙы" мәҡәләһендә ошо фекерҙе әйткәйнем.**

# ҺАҠҠА БАҪҺЫН ҺӘР МИЛЛӘТТӘШ!



Ысынлап та, башҡаса уйлау, фекерләү мөмкин түгел. Сөнки яҙыусының, милли баҫма журналисының балаһы уларҙың яҙғанын уҡыу түгел, күп осраҡта башҡортса һөйләшмәй, артистар, йырсылар араһында ла шул хәл күҙәтелә. Хатта башҡорт теле уҡытыусылары ғаиләләрендә лә ошондай уҡ күренеш. Үҙем шаһит булған хәлдәрҙән сығып әйтәм быларҙы. Ошо көндәрҙә генә республика баҫмаларының береһендә эшләгән коллегам менән бәхәсләшеп киттек: "Юҡ, балаларҙы башҡортса һөйләштереп булмай. Булмаясаҡ та!" - тип ҡырт киҫте һәм был хәлде тәбиғи бер күренеш булараҡ ҡабул итергә һәм уның менән күнергә өндәне. Милли интеллигенция туған тел яҙмышына шундай ҡарашта булғас, ябай халыҡтан ни көтмәк.

Әлбиттә, матур миҫалдар ҙа бар. Тик улар бик һирәк, һәм беҙ ундай осраҡты феномен кеүек ҡабул итәбеҙ: "Ҡарале, шуның балаһы башҡортса һөйләшә, башҡортса йырлай (!)", - тип һушыбыҙ китә, әйтерһең, ауыл уртаһында айыу бейетәләр. Йырсы Дамир Таиповтың Баязит улына, уның теленә һоҡланмаған кеше юҡтыр. Интернет киңлегендә күҙгә салынғандарҙан йырсылар Азамат һәм Нәсимә Тимировтарҙың улдары Арыҫланды, мәҫәлән, маҡтап үтеү ҙә яҙыҡ булмаҫ.

Совет осоронда тел мәсьәләһе ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә, эшсе ҡасабаларҙа киҫкен торһа, хәҙер ауылдарҙа ла балалар русса һөйләшә. Ошо ысынбарлыҡты ҡабул итеп, телебеҙҙе яңы шарттарҙа нисек ҡотҡарыу тураһында етди уйларға һәм аныҡ ҡарарға килергә ваҡыт еткән генә түгел, уҙып бара бит, йәмәғәт. Башыбыҙға көл һибеп, илаулауҙан бер фәтеүә лә сыҡмаясаҡ. Йәмәғәтселек, ғалимдар, власть органдары бер ҡарарға килеп, аныҡ бер йүнәлеш һайлауҙан, ғәмәли сараларға тотоноуҙан башҡа хәлебеҙ юҡ.

Иң элек ғаиләлә башҡортса һөйләшеү модаға инергә тейеш. Бының өсөн киң пропаганда йәйелдерергә кәрәк. Аллаға шөкөр, телевидение-радиобыҙ эшләп тора, гәзит-журналдар сыға, коммерцияға ҡарамаған автономлы "Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы" әүҙемселәре кеүек йәмәғәтселәребеҙ бихисап, һәр районда һәм ҡалала эшләгән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының тәүге ойошмалары бар.

Икенсеһе - уҡытыу. Иҫегеҙҙәме, Ырымбур егете Вячеслав Чернев Башҡортостан юлдаш телеканалында үтә лә ябай, ләкин шул тиклем аңлайышлы итеп башҡорт теле һабаҡтары биргәйне бер осор. Шул методиканы нигеҙ итеп алып булмаймы ни академик уҡытыу, ҡағиҙәләр тылҡыу урынына. Иң элек уҡыусы һөйләш телен үҙләштерһен. Ә туған телде тәрән өйрәнеүҙе милли мәктәптәргә, полилингваль гимназиялицейҙарға ҡалдырыу урынлылыр.

Өсөнсөнән, телдең ҡулланылыш даирәһен киңәйтмәй тороп, алға китеш булмаясаҡ. Бында иһә, аныҡ сараларҙы власть органдары күрергә тейеш. Мәсәлән, дәүләт учреждениеларында эшләгәндәргә тел белгән өсөн эш хаҡына 15 процент өҫтәп түләү үтә лә әһәмиәтле булыр ине. Мин үҙем Сибай ҡала хакимиәтендә эшләнем, башҡа бүлектәргә килгән башҡортса мөрәжәғәттәрҙе лә тәржемә итеп ултырҙым. Тимәк, өҫтәмә хаҡ алмайынса, кемдеңдер хеҙмәтен башҡарҙым.

Финанслауға ҡағылышлы үтә лә мөһим был мәсьәлә, моғайын, дөйөм Рәсәй кимәлендә, барлыҡ милли республикалар ҡатнашлығында күтәрелһә, маҡсатҡа ярашлы булыр. Уның өсөн нигеҙ ҙә бар хәҙер - Президент Владимир Путин йыл һайын 8 сентябрҙә Рәсәй Халыҡтары телдәре көнөн билдәләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Тимәк, Дәүләт Думаһы депутаттары ла үҙ һүҙен әйтергә тейеш.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН.**

*ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘ!*




# БАР ҺҮҘҘӘРГӘ ЛӘ...

## тәржемә кәрәкмәй

**Туған телебеҙ - башҡорт теле - шул тиклем гүзәл һәм мөһабәт, уның киңлекбейеклектәрен бер тында, бер көндә йә иһә айҙар-йылдар буйына ла иңләп сығып булмаҫ. Тик шуныһы: ошо гәзиз телебеҙҙә аралашҡан, һөйләшкән, яҙған саҡтарыбыҙҙа үҙ телмәребеҙгә иғтибарлы түгелбеҙ, йыш ҡына ҡайһы бер һүҙҙәрҙе боҙобораҡ, урынһыҙыраҡ, хатта хаталыраҡ итеп ҡулланабыҙ.**

Мәсәлән, "бөгөнгө көн" тип һөйләгәндәрен йыш ишетергә тура килә. Был бит "майлы май" тип әйтеүгә тиң! Ошо хаталы һүҙбәйләнештең аңлатмаһы "был көнгө көн" була инде. "Бөгөн" һүҙенең мәғәнәһе "был көн", "әлеге көн" икәнен нисек итеп төшөнөп булмайҙыр инде, аптыраҡ. "Әлеге көндә" тип әйтеү семантик яҡтан урынлыраҡ бит.

Тағы ла бер лингвистик факт хаҡында әйтеп китеү урынлы булыр. Һүҙ - сит ил телдәренән башҡорт теле лексикаһына инеп, нығынып ҡалған һүҙҙәр тураһында. Мәсәлән, беҙҙең барса киң матбуғат сараларында рус теленән ингән "цифровизация", "цифровые технологии" тигәндә "һанлаштырыу", "һанлы технологиялар" тип тәржемәләп әйтергә-яҙырға тамам күнегеп киттеләр. Был дөрөҫмө һуң? Юҡ инде. "Һан" ("число") һәм "цифр" - бер үк төшөнсә түгел икәнен башланғыс класс уҡыусыһы ла белә. Һан - әйбер-предметтарҙың иҫәбен белдерһә, цифр - һан билдәһе. Йәгеҙ әле, иптәш филологтар, "һанлы технологиялар" һүҙбәйләнешен рус теленә тәржемәләп ҡарағыҙ. "Числовые технологии" килеп сыға түгелме һуң? Ә былдай һүҙбәйләнеш рус телендә юҡ! Тимәк, дөрөҫө - "цифрлаштырыу", "цифрлы технологиялар" тип һөйләү һәм яҙыу фарыз беҙгә.

Ғөмүмән, боронғо латин теле, башҡа Европа халыҡтары телдәренән үтеп ингән һүҙҙәрҙе, кәрәге бармы-юҡмы, башҡортсалаштырыу менән мауығырға атлығып тормайыҡ әле. Шул уҡ "технология", "капитал", "социум", "паритет", "олигарх", "план", "комитет", "коридор", "конвенция", "контракт" һәм башҡа меңәрләгән ошондай һүҙҙәрҙе нисек бар, шулай ҡулланыуыбыҙ телебеҙ үҫешенең кире ҡаҡҡыһыҙ бер күренеше икәнен онотмаһаҡ ине.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

✓ *Килмәк абыз Нурышев, Бәпәнәй абыз Төрөпбирдин, Кинйә абыз Арыҫланов, Батырша мулла Ғәлиев, Салауат батыр Юлаев кеүек шәхестәребеҙ ғилемлелек һәләтен ҡаһарманлыҡ менән ҡушыуы йәһәтенән бөйөк заттар ҡатарында ҡала.*



*ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА*

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**




***Салауат Хәмиҙуллин:*** Рустар тарафынан һалынған Өфө ҡалаһының "Иҫке Өфө" атамаһы менән бәйле булыуы хаҡында беренсе булып Петр Рычков яҙып сыға: **"О звании города Уфы можно догадываться, что оно не вновь ему придано, но паче возобновлено прежнее, и сущее то, которым ногайские ханы исстари живучи в здешних местах, город свой именовали, ибо никакого резону не видно, чтоб городу, построенному над самою рекою Белой, коя величиною против реки Уфы вдвое больше, именоваться по реке Уфе..."**. Ысынлап та, бында яңы ғына күсеп килгән рустарҙың үҙҙәре төҙөгән ҡалғәгә Өфө тауҙары ашаһында ағып ятҡан йылға исемен ҡушыуҙары икеле. Өфө йылғаһының тамағы ҡәлғә нигеҙләнгән Сутолока йылғасығы тамағынан ни тиклем алыҫ булыуы Ағиҙел йылғаһы ағымы буйлап Кузнецов затоны урынлашҡан киң ярымутрауҙы урап үткән саҡта яҡшы һиҙелә. Рәсәй батшаһының Урус кенәз менән хатлашыуы тексынан Өфө атамаһының йылғаны түгел, ә бындағы урынды аңлатыуы асыҡ беленә: **"А на Уфе на Белой Воложке государь велел город поставити, что беглой из Сибири Кучюм царь, пришед к государеву отчину в Казанский уезд в башкирцы, учел кочевати..."**.

***Владимир Агте:*** Рустар бында килгәс, яңы төҙөлгән ҡәлғәне элекке тораҡ исеме менән атай башлағандарҙыр. Рычков та ошо фаразды яҡлап яҙа. Мин уға ышанам, сөнки ул үҙ заманының бик уҡымышлы заттарынан һанала, хеҙмәттәрендә бик ентекләп тикшерелгән мәғлүмәттәрҙе теркәй. Үҙем дә ошо фараз яҡлымын, сөнки бында ҡасандыр кешеләр йәшәгән тораҡ булған, ә уның ҡайҙа урынлашҡанын археологтар асыҡларға тейеш.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рычков "Иҫке Өфө" урынлашҡан тип иҫәпләгән Усол тауы территорияһы бер ҡасан да тикшерелмәгән. Шулай булһа ла, айырым табылдыҡтарҙы бында һуң урта быуаттарға ҡараған мәҙәни ҡатламдар булыуы мөмкинлегенә дәлил итеп ҡарап булыр ине.

Һуң урта быуаттар эпохаһында, йәғни Башҡортостандың Мәскәү батшалығына инеүе алдынан Өфө ярымутрауында ниндәй ситуация булғанлығын асыҡлау күп һорауҙарға яуап табыу өсөн асҡыс булыр ине. Иртә урта быуаттарҙа "Боронғо Өфө" тип исемләнгән ҡала булыуы хаҡындағы тезис менән, теге йәки был иҫкәрмәләр өҫтәп, тикшеренеүселәрҙең барыһы ла тиерлек килешһә лә, һуң урта быуаттар менән бәйле ситуация күпкә ҡатмарлыраҡ.

Һуң урта быуаттарға ҡараған тораҡ ҡомартҡылары табылған хәлдә иртә быуаттарҙағы "Боронғо Өфө" тип атап булған тораҡ, һуң урта быуаттарҙағы "Иҫке Өфө" һәм хәҙерге Өфө араһындағы туранан-тура күсәгилешлек линияһын билдәләп буласаҡ. Шуның өсөн Урус кенәздең батша Федор Ивановичҡа яҙған хатынан алынған бер мәғлүмәтте яңынан ҡарап, анализ биреү урынлы булыр: **"...ты на четырех местах хочешь городы ставити: на Уфе, да на Увеке, да на Самаре, да на Белой Воложке..."** Белая Воложкалағы ҡәлғә, моғайын, хәҙерге Бирск янындағы нығытылған пунктты белдергәндер. Алда әйтелгәнсә, Нуғай наместничествоһы осорондағы ҡәлғә Өфө тип аталған. Увек - ғәрәп-фарсы сығанаҡтарында иҫкә алынған Алтын Урҙа ҡалаһы Укек булырға тейеш, ул хәҙерге Һарытау ҡалаһы сиктәрендә урынлашҡан була. Һамарға килгәндә, ошо исемдәге тораҡ пункт бер туған Пициганиҙарҙың 1367 йылғы картаһында күрһәтелә. Был картала Өфө тип аталған ҡала юҡ, әммә Һамарҙан төньяҡ-көнсығыштараҡ Паскерти ҡалаһы күрһәтелгән. Авраам Крескестың 1375 йылғы Каталан атласында, ә ул Европа негоцианттары (сауҙагәрҙәре) өсөн географик ҡулланма итеп сығарылған, Пасхерти тип яҙылған пунсон (тораҡ пункттың урынын күрһәтеүсе шартлы билдә) бар. 1872 йылда профессор Филипп Брун үҙенең "Каспий диңгеҙенең XIV быуат карталары буйынса периплы" тигән хеҙмәтендә ошолай тип яҙа: **"... город Pascerty, явно тождественный с городом Pascherti, отмеченным на том же месте в карте каталанской, и обязанным своим именем башкирам..."**

**(Дауамы. Башы 37-44-се, 46-48-се һандарҙа).**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# БАШҠОРТ АБЫЗДАРЫ ҺӘМ БАТЫРҘАРЫ

Халыҡ бындай батырҙарын маҡтап йырҙар сығарған, исемдәрен легендаларға һалып хәтеренә беркеткән. Махсус ҡобайырҙар бағышлаған: "Сура батыр", "Сүкем батыр", "Баязит батыр", "Аҡшам батыр", "Кәбәк батыр", "Түлгән батыр" һ. б.

Батырҙарҙан батырҙарҙы ла халыҡ айырып ҡарар һәм ололар булған. Бына "Баязит батыр" ҡобайыры ни ти:

*Илдәрҙә күп батырҙар:*
*Кейек аулар батыр бар,*
*Дошманды яулар батыр бар,*
*Илен һаҡлар батыр бар...*
*...Баязит батыр ир ине,*
*Батырҙан батыр Баязиттай,*
*Арыҫлан һынлы батыр бар,*
*Баязит батыр ир ине,*
*Күкрәгенән ҡан сыҡһа,*
*Тирем сыға тир ине,*
*Баязит батыр ир ине,*
*Яу ҡайтарыр ир ине,*
*Яу ҡайтарыр ир ине,*
*Нуғай мырҙа ғәскәрен*
*Ҡуй һарыҡтай тураҡлап,*
*Ҡан ҡалтырап онтаҡлап,*
*Иленә ҡайтыр ир ине.*

Халыҡ шундай батырҙарына исемен, батырлыҡтарын яҙып, һәйкәлдәй итеп ҡәбер таштарын ҡуйыр булған. Ошондай бер ҡомартҡы булып, Шишмә Аҡзыяратында батырҙар ҡәбере таштары - башҡорт батырҙарының бер пантеоны һаҡланған. Бында XVI-XVIII быуаттарҙа иле алдында оло дан ҡаҙанған батырҙарын халыҡ Башҡортостан ил-еренең төрлө тарафтарынан килтереп, Аҡзыяратҡа ерләр һәм һәйкәлдәй бейек таштар яҙып ҡуйыр булған. Был хаҡта рус ғалимы Вильяминов-Зернов "Памятники с арабско-татарской надписью в Башкирии" (1859) тигән мәҡәләһендә айырып әйтә.

Һәр хәлдә, башҡорт халыҡ ижадында данланған, исемдәре тарихта билдәле булған батырҙарыбыҙҙы социаль-ижтимағи күҙлектән дә ныҡлы өйрәнәһе бар әле. Атаҡлы башҡорт абыздары, абызсылыҡ институты урта, яңы быуаттарҙа милли ижтимағи фекер үҫешендә ҙур урын тотһа, данлыҡлы батырҙарыбыҙ ҡаһарманлыҡ тарихының, быуаттар буйы азатлыҡ өсөн көрәш юлының алтын менән яҙылған биттәрен тәшкил итә. Килмәк абыз Нурышев, Бәпәнәй абыз Төрөпбирдин, Кинйә абыз Арыҫланов, Батырша мулла Ғәлиев, Салауат батыр Юлаев, Бөҙерғол депутат Юнаев кеүек шәхестәребеҙ уҡымышлылыҡ, ғилемлелек һәләтен ҡаһарманлыҡ, яу батырлығы менән ҡушыуы йәһәтенән бөйөк заттар ҡатарында ҡала. Ошо аспектта уларҙың эшмәкәрлеген киңерәк өйрәнәһе һәм баһалайһы бар әле бөгөнгө ғалимдарыбыҙға.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**

**(Аҙағы. Башы 42-48-се һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Башҡортостанда кәзәләрҙе бик аҙ аҫырағандар. Ярлыларға улар һыйырҙы алмаштырған. Башҡорт кәзәләре тоҡомо рустарҙыҡынан бер нисек тә айырылмаған - бәләкәй, ҡара, аҡ һәм һоро төҫтә булған. Йөндәре, нигеҙҙә, иҙән балаҫы һәм буҫтау эшләүгә тотонолған; дебетенән шарфтар һәм шәлдәр бәйләгәндәр. Ите аҙыҡ булараҡ ҡулланылған, тиреһенән күн эшләнгән, бик һирәк кенә тире иләнгән.

Кәзәләрҙең енес, йәш һәм тыуыу ваҡыты буйынса бүленеше һарыҡтарҙыҡынан әллә ни айырылмаған. Ваҡытында, яҙғыһын тыуған кәзә бәрәсе ылаҡ (тәкә ылаҡ, орғасы ылаҡ) тип аталған. Йәйгеһен тыуғаны - йәйҙәүес ылаҡ (тәкә йәйҙәүес ылаҡ, орғасы йәйҙәүес ылаҡ); көҙөн тыуғандары - әтәмбәй ылаҡ (тәкә әтәмбәй ылаҡ, орғасы әтәмбәй ылаҡ). Имеүҙән туҡтап, икенсегә бәрәсләгәнгә тиклемге бәрәс бәрән кәзә, ә ошо осорҙағы тәкәһе бәрән тәкә тип аталған. Ике йәштән ҙурырағы - тәкә, кәзә тәкәһе, ә орғасы кәзә икенсегә бәрәсләгәндән алып өсөнсө бәрәсләгәнгә тиклем шешәк кәзә тип йөрөтөлгән. Бестерелгән тәкә - беселгән тәкә, ә өсөнсөгә бәрәсләгәндән һуң артабан орғасы кәзә тип кенә аталған. Беренсе йыл бәрәсләмәгән кәзә - тыуса, үрсем бирмәгәне - тыу кәзә, башҡа йылдарҙа бәрәсләп, ағымдағы йылда бәрәсләмәгәне ҡыҫыр тип аталған.

Йорт хайуаны булараҡ сусҡалар, күрәһең, башҡорттар исламды ҡабул иткәс юҡҡа сыҡҡан. Һәм башҡорттарҙың сусҡа тотоуы тураһында бер ниндәй ҙә тарихи документтар юҡ. Киреһенсә, башҡорттар хатта ерҙәрен ҡуртымға алыусыларға ла сусҡа тотоуҙы тыйыу тураһында күрһәтмәләр бар. Мәҫәлән, Ҡырғыҙ олоҫоноң Ҡаҙан даруғаһы башҡорттарының береһенең (1745 йыл) Ҡаракүл крәҫтиәндәренә үҙ ерен оброкка биреүе тураһындағы яҙмаларында "сусҡанан башҡа теләһә ниндәй мал йөрөтөргә" рөхсәт бирелгән.

Борон башҡорттар, ҡаҙаҡтар кеүек үк, шундай уҡ тоҡомло ике үркәсле дөйәләр ҙә аҫыраған. П. С. Паллас белдереүенсә, XVIII быуаттың икенсе яртыһында улар бигерәк тә Урал аръяғындағы Иҫәт провинцияһы башҡорттарында күп булған. В. М. Черемшанскийҙың һүҙҙәре буйынса, уҙған быуаттың урталарында Ағиҙел, Дим, Һаҡмар һәм Исәт йылғалары буйында урынлашҡан башҡорттарҙың дөйәләре булған, улар аттар кеүек үк йөк ташыуҙа файҙаланылған. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, 1850 йылда Ырымбур губернаһында 800 дөйә иҫәпләнгән. Уҙған быуаттың аҙағына башҡорттар араһында бик һирәктәр генә дөйә аҫыраған.

Башҡорттар дөйәләрҙе күрше ҡаҙаҡтарҙан һәм ҡалмыҡтарҙан һатып алған, үҙҙәре лә үрсетергә тырышҡан. Дөйә әрһеҙ хайуан булһа ла, Урал алдының һыуыҡтары улар өсөн бик ҡаты булған. Шуға күрә башҡорттар улар өсөн йылы ҡыуыштар ҡорған, аҫтарына һалам йәки сытыр түшәгән. Йәш дөйәләрҙе улар, ҡаҙаҡтар кеүек үк, ҡышҡылыҡҡа кейеҙ кейем кейендереп, инә орғасы дөйәләр менән бергә ҡыуыштарға япҡан.

Дөйәләрҙең итен һәм һөтөн башҡорттар аҙыҡ итеп ҡулланған, йөнөн һәм тиреһен төрлө ихтыяжға файҙаланған.

**(Дауамы бар).**

✓ *Рәсимә инәйҙәр дәрес башланыуға йоҡо бүлмәләрен бушатып, класс кабинетына әйләндерәләр. Батша заманындағы боронғо мәктәпкә оҡшағайны ул белем усағы. Уҡытыусылары Рәзилә Рәхип ҡыҙы Ҡусҡар ауылынан йөрөп уҡытты.*



**Шундай бер риүәйәт бар: ни ягы менән асыуландырғандыр, әсәһе генерал улын сыбыҡ менән һыҙыра икән. "Әсәй, мин бит генерал", ти икән улы. "Һин, ана, һалдаттарыңа генерал, минә һин бала", тигән әсәй кеше...**
**Эйе, һин генералһыңдыр ҙа, йә ябай һалдатһыңдыр, бәлки, юғары наградаға лайыҡ булған Геройһыңдыр, әммә әсәй өсөн һин - бала! Ҡыйыулығы һәм батырлығы өсөн Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булған Тамерлан Илһамов та, эйе, әсәһе Айгөл Милләт ҡыҙы өсөн күҙ нурындай ҡәҙерле бала булып ҡала. Дәрәжәләре лә, Герой булыуы ла әсәнең балаһын юғалтыу ҡайғыһын еңеләйтә, үлемде аҡлай алмай. Шулай итеп, Тамерлан Илһамовтың әсәһе һөйләгәндәрен тыңлайыҡ.**

# ҠАЙТА АЛМАҒАН йондоҙло

### Балалар балдан татлы…

Тамерлан - беренсе балам, ул 1991 йылдың 22 июнендә тыуҙы. Һуғыш башланған көндә... Тыуғас та, әллә көнөн үҙгәртеп яҙырғамы, тигән уй килде башыма. Әсәйем: "Ярай, шулай ҡалһын да ҡуйһын инде, көнөн үҙгәртеп, яҙмышын үҙгәртә алмаҫһың", - тиһә лә, ул көн ниндәйҙер шомло бер мәл булып иҫтә ҡалды, йыш ҡына иҫкә төшөп ыҙалатты.

Бала табыу йорто дауахананың икенсе ҡатында урынлашҡайны. Хәлебеҙҙе белешергә килгәндә атаһы: "Исемен кем тип ҡушабыҙ?"- тип һорай. Шулай килеп сыҡты, икебеҙ бер юлы "Тамерлан!" тинек, сөнки шул ваҡытта телевизорҙа еңелеү белмәгән полководец Тамерлан тураһында матур ғына реклама бара ине. Икебеҙҙең дә ятыраҡ исем ҡушҡыбыҙ килгәндер, күрәһең. Оло кешегә был исемде әйтеүе ҡыйын булды микән, әсәйем ейәненә Тамерлан тип өндәшмәне, Там-там, тип йөрөттө. Ул мәлдә беҙ ҡайны-ҡәйнә йортонда йәшәй инек. Ҡәйнәм дә баштан уҡ ейәнен ныҡ яратты. Тыныс ҡына бала булды улыбыҙ, бик уҡ илап та барманы. Иртәнсәк ҡайным менән мал ҡарарға сығып китһәк, быуындары ауыртып, өйҙән сыҡмаған өләсәһе ҡултыҡ таяҡтарына таянып, беҙҙең бүлмәгә инә лә, һыйыр һауып ингәнсе аҫмалы сәңгелдәктә ятҡан Тамерланды бәүетеп ултыра торғайны. Ана, әсәйең ҡайтты, хәҙер килә эргәнә, тип, уның менән һөйләшкәне һаман да хәтерҙә. Тамерлан өләсәһенең һүҙҙәрен әкиәт һымаҡ тыңлап ята торғайны. Ҡайным да ныҡ ҡына яратты уны, ҡулында һәҙерләп бәүетеп кенә йөрөттө, атлай башлағас, етәкләп тышҡа алып сығып китер ине. Ҡәйнәм, ауырыуы көсәйеп, етмешкә етмәй үлеп ҡалды. Ҡайным ҡабат өйләнмәне, улар бер-береһен ныҡ хөрмәт итә инеләр.

### Өс кешелек мәктәп

Тәүге тормош иптәшем - Тамерландың атаһы, Асҡарҙыҡы, ә минең төп сығышым Рысҡужа ауылынан. Ҡыҙғанысҡа, ғаиләбеҙ тарҡалды, беҙ айырылыштыҡ. Ирем икенсе ҡатын алғас, эргәһендә күренеп йөрөмәһен, балаға травма булмаһын, тип, Ярлыҡап ауылына фельдшер булып эшкә урынлаштым. Ул ваҡытта Тамерланға өс йәш ине. Бер йылдан икенсе ир менән тормоштарыбыҙҙы бәйләнек. Бәләкәй генә ике урамлы ауылда Тамерлан тиҙ арала дуҫтар тапты, үҙенән бер йәшкә өлкән Илгиз, күп балалы ғаиләлә тыуған Нәркәс исемле ҡыҙ менән бергә уйнап үҫтеләр.

Илгиз, әсәһе үлеп, өләсәһе менән икеһе генә йәшәй ине. Бер көн уның өләсәһе беҙгә танышырға килде. "Балаларҙы мәктәпкә бирергә ваҡыт етте бит", - ти. Ул ваҡытта Илгизгә - ете, Тамерланға алты ғына йәш ине. Етмәһә, ауылда башланғыс мәктәп тә юҡ. Илгиздең өләсәһе, баламды бер ҡайҙа ла ебәрмәйем, тип борсола. Район мәғариф бүлегенә барҙыҡ. Унда, өс бала булһа ғына мәктәп асып була, тинеләр. Рәсимә инәй, Илгиздең өләсәһе, "Әйҙә, һин дә балаңды уҡырға бир ҙә ҡуй", тип өгөтләй. Минә лә бала йәл, Тамерлан әле мәктәпкә әҙер түгел һымаҡ. Аптыраныҡ, ни эшләргә, тағы ҡайҙан бер бала табырға? Улар менән бергә уйнап үҫкән Нәркәс 95-се йылғы ғына. Флүрә апай, Нәркәстең әсәһе, "Ярай, уҡыһа уҡыр, уҡымаһа, йөрөр шунда, ҡәләм тотоп ултырыр әле эргәләрендә", тип ризалығын бирҙе. Тағы мәғариф бүлегенә барып, Ярлыҡапта мәктәп асырға һөйләштек тә ул, тик уҡырға мәктәп бинаһы юҡ. Уйлай торғас, Илгиздең өләсәһе өйөнөң бер бүлмәһен бирергә риза булды. Шулайтып, Ярлыҡап ауылында күрше Тал Ҡусҡары ауылы урта мәктәбенең башланғыс класс филиалы булып, өс бала өсөн Ярлыҡап башланғыс мәктәбе асылды.

Тамерлан көүҙәгә үҙенән күпкә ҙурыраҡ булған Илгизде ныҡ яҡын күрҙе, шуға ла уҡырға бармайым, уҡымайым, тип, ҡарышып торманы, иң мөһиме, холҡон күрһәтте, ирҙәрсә аҙым яһаны. Рәсимә инәйҙәр дәрес башланыуға йоҡо бүлмәләрен бушатып, класс кабинетына әйләндерәләр. Батша заманындағы боронғо мәктәпкә оҡшағайны ул белем усағы. Уҡытыусылары Рәзилә Рәхип ҡыҙы Ҡусҡар ауылынан йөрөп уҡытты. Бер ҡаршылыҡһыҙ ыңғай ғына уҡып алдылар ҙа киттеләр балалар. Рәсимә инәй эй ҡыуанды ейәненең эргәһендә ҡалыуына! Аҙаҡ парталар килтерҙеләр, тормош иптәшем класс таҡтаһы эшләп бирҙе. Йәшкә бәләкәй булһа ла, Нәркәс был ике малайҙы елтерәтеп кенә алып йөрөнө. Асҡарҙа гимназияла башланғыс кластарҙы уҡытҡан Әлиә (минең бер туған һеңлем) беҙгә килгән ваҡытта Тамерландың дәфтәрҙәрен ҡарай ҙа, уларҙың бөхтәлегенә аптырап торғайны. Ысынлап та, уның дәфтәрҙәре лә, дәреслектәре лә тәртиптә булды. Тимәк, уҡытыусылары ла талапсан булғандыр. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ бит уны мәктәпкә әҙерләмәнек тә, ҡулына мәктәп өсөн кәрәк-яраҡ һалынған пакет тотторҙоҡ та ебәрҙек. Мәктәп кейеме булды, әлбиттә, уҡыуға галстук таҡып ҡына йөрөнө. Аҙаҡ, улым Герой исеме алғас, бер уҡытыусыһы, уның хәрби кеше булыры бала сағынан билдәле булды, тине.

### Тамыры ниндәй, емеше шундай

Беҙҙең атайыбыҙ хәрби кеше, прапорщик булды, ғүмере буйы Асҡарҙа военкоматта эшләне. Ул йоҡларға ятыр алдынан кейемдәрен ултырғысҡа бөкләп кенә һала торғайны. Тамерлан да нәҡ уның кеүек, әйберҙәрен тәҫләп һалмайынса, йоҡларға ятмай торғайны. Атайым Рысҡужа ауылы Әхтәмовтар ғаиләһенән. Нурғәли олатайҙың өс улы хәрбиҙәр юлын һайлаған: Зиннәт апабыҙ (атайыбыҙҙың бер туған ағаһы) Стәрлетамаҡта ракета ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән. Унан ҡала Һиммәт апабыҙ ҙа, хәрби училище бөтөп, хәрби кеше булды, Тәтешләлә военкоматта эшләп, хаҡлы ялға сыҡты. Ул беҙҙең атайҙы ла хәрби училищела уҡырға өндәгән. Атайым башта ул саҡтағы Сибай педагогия училищеһын тамамлаған, аҙаҡ хәрби училищены уҡып бөтә алмаған, өләсәйебеҙ ауырыу сәбәпле, уны ҡайтартып алғандар. Ул оҙаҡ йылдар Асҡарҙа военкоматта эшләне. Уны белгәндәр, шул хәтлем һәйбәт кеше булды, тип иҫләйҙәр.

### Шул тиклем йыйнаҡ булды

Башланғыс мәктәпте бөткәс, Тамерлан менән Нәркәс Ярлыҡапҡа тау аша урынлашҡан ете саҡрым тирәһе алыҫлыҡтағы Тал Ҡусҡарына уҡырға барҙылар, Илгиз Асҡар урта мәктәбенә китте. Ҡайҙа ла барыбер шул уҡ ауыл малайҙары бит инде, класташтары менән тиҙ арала дуҫлашып киттеләр. Бигерәк тә ҡыҙҙар, Тамерлан да Тамерлан, тип иҫтәре китте. Бер мәл ҡыҙҙар, яңы класташтарына күҙҙәре төшөп, үҙ-ара сәкәләшеп тә алғандар. Сибәр ине балам! Класс етәкселәре лә һәйбәт булды, ғөмүмән, Тамерлан бәләкәйҙән дуҫтарынан, класташтарынан уңды, һәр саҡ көслө уҡытыусылар ҡулына эләкте. Ул төрлө патриотик конкурстарҙы, башҡа шундай сараларҙы ярата ине. Был Ҡусҡар мәктәбендә спортсмен уҡытыусыларҙың күп булыуынан да киләлер.

Ҡышҡы һыуыҡтарҙа Тамерлан туғаныбыҙ Саматтарҙа йоҡлап ҡала ине. Уның унда айырым бүлмәһе булды. Самат ағайҙарҙың үҙҙәренең өс малайы, ике ҡыҙы бар. Еңгәй, Тамерланға ҡарап иҫем китә, ти, иртәнсәк беҙҙең малайҙар нәски-фәлән өсөн һуғышып китә, ә бының һәр әйбере үҙ урынында.

Улымдың уҡыуы уртаса ине, ә бына физкультура дәрестәрен яратты, мәктәп эргәһендәге спорт майҙансығында ныҡ шөғөлләнделәр. Субботникмы, йә башҡа берәй сара булһа, өйгә ҡайтып, тамаҡ ялғап, кире мәктәпкә китер ине. Үҙе бер башҡа бала булды ул, шул тиклем тәртипле, ипле ине. Хәрби хеҙмәтен башлағас, отпускаға ҡайтҡанда мотлаҡ аҡ төҫтәге кейемдә ҡайта, бәләкәй генә берәй тап төшһә, сыҙамай, кейемен шунда уҡ таҙарта һала торғайны. Аҡты яратҡас, күңеле таҙа булғандыр, тим. Һәр ҡайтыуына өҫтәлдәр әҙерләп, оло ҡунаҡ һымаҡ ҡаршыланыҡ уны. Ул бит әҙ генә ваҡытҡа ҡайта, туғыҙ йылда туғыҙ тапҡыр ғына күреп өлгөрҙөк уны.

### "Хеҙмәт итеү" тигән йола бар

Тамерлан туғыҙ класты бөткән йылда Асҡарға, атайыбыҙҙан ҡалған бер бүлмәле фатирға күстек. Баланы ситкә ебәргем килмәне лә, "Әсәй, бында тарыраҡ, олатайҙы ҡарарға кәрәк, мөмкинме, мин уларҙа йәшәп торам?" тигәс, икеләнһәм дә, ҡаршы килмәнем. Ҡайным үҙе лә, ебәр инде, эргәмдә йөрөһөн, тигәс, атаһының атаһына - олатаһына барып-ҡайтып йөрөнө. Ул ваҡытта ҡәйнәм юҡ, ҡайным яңғыҙы ғына йәшәй ине. Улым элек сәңгелдәге эленеп торған бүлмәлә йәшәне, олатаһын ҡараны, тәүге ярҙамсыһы булды. Шулай Асҡарҙа ун бер класты бөттө, имтихандар тапшырҙы. Класташ ҡыҙҙары, Тамерлан беҙҙең араға электән бергә уҡыған һымаҡ килеп инде, тиҙәр. Бында ла Тимур командаһы ойоштороп, һуғыш ветерандарына ярҙамға йөрөгәндәр, төрлө экскурсияларҙа булғандар, Тамерлан кластарында шунда уҡ лидер булып киткән.

Мин уны, башҡаларҙы рәнйетмә, ҡаршы һүҙ әйтмә, һуғышма, тип иҫкәртеп кенә торҙом. Бәлки, шуға ла ул шулай ипле булғандыр. Уҡырға барғас та Усманов Нургиз, Шакиров Азамат исемле класташтары менән дуҫлашып киттеләр, айырылмаҫ өс таған кеүек булдылар. Спортты үҙ иттеләр, саңғыла, сноубордта шыуырға яраттылар, "Батыр" физкультура комплексынан сығышманылар. Өсөһө лә һомғол буйлы, мыҡты көүҙәле

***Тамерлан тураһында төшөрөлгән "Ключи от неба" документаль фильмында Нургиз дуҫы уның тураһында һөйләй алмай, күҙ йәштәренә быуыла. Улым бит Сирияла ғына өс тапҡыр булған, өсөһөндә лә миҙал менән ҡайтты. "За отвагу" миҙалы уға 2015 йылда уҡ Сирияла күрһәткән батырлығы өсөн бирелгән. Бер ҡайтҡандарында Нургиз менән икеһен Асҡарҙағы мәҙәниәт йортонда үткән сараға саҡырғайнылар, шунда күптәр "Ул миҙал бит һирәк осраҡта бирелә", тип иҫтәре китте. Уның ниндәй батырлыҡтар күрһәткәнен беҙ бөтәһен дә белмәйбеҙ. Улар хеҙмәт иткән хәрби часка барғанда күп нәмә ишетеп ҡайттыҡ.***

***✓ Тамерландарҙың батырлығы арҡаһында йөҙҙән ашыу личный состав тере ҡалды, улар ҡыйыу булмаһа, боеприпастар ҙа көлгә осор ине, тип, беҙгә рәхмәттәр әйттеләр.***

# УЛАНДАРҘЫҢ...

## дандары ҡалды

булдылар, матур кейенеп йөрөнөләр, кис урамға сыҡһалар ҙа, эсеп, һуғышып йөрөмәнеләр. "Әсәй, беҙ сығарылыш кисәһенә аҡ костюм кейергә һөйләштек", - ти бер көн. Беҙ, тигәне, шул өсәһө инде. Һүҙҙәрендә торҙолар, өсәһө лә ап-аҡ ҡына костюм һатып алдылар.

Бәктиһәң, улар армияға ла бергә барырға һөйләшкәндәр икән. Мин уның юғары уҡыу йортона уҡырға инеүен теләйем, ныҡышам хатта. Миңә әйтмәй генә документтарын Сибай институтының юриспруденция бүлегенә биргәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Үҙенә оҡшаймы һуң, тиһәм, аныҡ ҡына яуап та бирмәй. Күрәһең, минең һүҙҙе йыҡҡыһы килмәгәндер, дуҫтарын да уйлағандыр. Шулай Сибайҙа уҡый башланы, тәүге сессияһын тапшырҙы, төркөмөндәге иптәштәре менән дә араһы һәйбәт булды. Ә баяғы дуҫтары армияға йыйына башлаған, Тамерлан да, ҡайтҡас уҡып бөтөрмөн әле, тип, улар ҙан айырылмаҫҡа булған. Шулай килеп сыҡты, Азамат менән икеһен бер көндә армияға оҙаттыҡ. Уны оҙатҡас, әсәйебеҙгә ярҙам итергә Ҡусҡар ауылына барғайныҡ. "Айгөл, һөйөнсө, Тамерланың ҡайтып килә ята", тип шылтыраттылар. Бәктиһәң, уны йәше тулмағанға Өфөнән кире ҡайтарғандар икән. "Йөрөп тә ҡайттыңмы, улым?" тип көлөштөк тә, шуның менән бөттө. Йәше тулғас, армияға яңынан оҙаттыҡ. Тамерлан Мәскәү өлкәһендә ракета ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итте. Хат яҙышып торҙоҡ, хаттарында гел һеңлеһен, ике ҡустыһын ҡайғыртты, үҙе тураһында бик үк яҙып барманы. Дедовщина бармы, тип һорашһам, "Беҙҙең бында барыһы ла яҡшы", тип кенә яуаплай. Шулай ҙа ҡустыһына "Армияға барһаң, туҡмалып алаһың инде, миңә лә эләкте бер аҙ", тип һөйләгән. Шулай, бер йыл хеҙмәт итте лә, ҡайтты.

### Өс таған

Әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтҡас, өс дуҫ - Тамерлан, Азамат, Нургиз, контракт төҙөп, хәрби хеҙмәткә кире барырға һөйләшкәндәр. Тик медкомиссия үтеп йөрөгәндә Тамерландың күҙе менән проблема килеп сыҡҡан. Беҙҙең тоҡомда бар ундай хәл. Ике дуҫы Өфөләге комиссияны тиҙ генә үтте, Тамерланға өс тапҡыр барырға тура килде. Ныҡышып, нисектер барыбер комиссиянан үтте, өсәһе лә Мәскәү эргәһендәге Краснознаменск ҡалаһында хеҙмәттәрен дауам иттеләр, биш йыл буйы бергә булдылар.

Аҙаҡ, Нургиз кәләш алғас, Сыбаркүлгә күсте, Азамат Чечняға китте, Тамерлан элекке урынында ҡалды, өс таған таралды. Нургиз, атаһы үлеп ҡалып, контрактын өҙөп ҡайтты, Азамат та тауҙан ҡолап төшөп, ҡулына операция яһатып, контрактын тамамланы. Беҙ ҙә Тамерланды, ҡайт, тип, көсләй башланыҡ. Ул һуңғы бер йылымды тултырам, тип йөрөнө, тик өлгөрмәне. Украинала ул 14-се йылда уҡ булған. Өс тапҡыр Сирияла булғанын, "За отвагу" миҙалы алғанын һуңынан ғына белдек, ул турала бер ваҡытта ла һөйләмәне, бәлки, һөйләргә ярамағандыр ҙа. Алты миҙалы барлығын беләбеҙ, бәлки, күберәктер ҙә. Улым 4 июлдә батырҙарса һәләк булған, Герой исеме биреү тураһындағы Указ 20 июлдә сыҡҡан, Алтын миҙалын 1 августа тапшырҙылар, Шайморатов ордены ла үлгәндән һуң бирелде.

### Белеп тә бөтмәйем...

Ниндәй генә ситуация булһа ла, стресҡа бирешмәүсәнлеге улымдың армияла үҙләштергән иң төп сифаты булғандыр. Тамерлан тураһында төшөрөлгән "Ключи от неба" документаль фильмында Нургиз дуҫы уның тураһында һөйләй алмай, күҙ йәштәренә быуыла. Улым бит Сирияла ғына өс тапҡыр булған, өсөһөндә лә миҙал менән ҡайтты. "За отвагу" миҙалы уға 2015 йылда уҡ Сирияла күрһәткән батырлығы өсөн бирелгән. Бер ҡайтҡандарында Нургиз менән икеһен Асҡарҙағы мәҙәниәт йортонда үткән сараға саҡырғайнылар, шунда күптәр "Ул миҙал бит һирәк осраҡта бирелә", тип иҫтәре китте.

Уның ниндәй батырлыҡтар күрһәткәнен беҙ бөтәһен дә белмәйбеҙ. Улар хеҙмәт иткән хәрби часка барғанда күп нәмә ишетеп ҡайттыҡ. Бәктиһәң, йыл һайын ПВО-сыларҙың ҙур хәрби частар араһында үткәрелгән "Ключи от неба" тигән хәрби ярыштар уҙғарыла икән. Унда ҡатнашҡандар хәрби техниканы, ракетаны тулыһынса яҡшы белергә, төҙ атырға тейештәр икән. 2015 йылда иң яҡшы дивизиондар араһында Тамерландың өс кешенән торған командаһы беренсе урын яулай, 2017 йылда - өсөнсө, 2020 йылда икенсе урын алалар. Һәр ярышҡа иң тәүҙә Тамерланды һайлағандар! Тамерландарҙың һуңғы яуынан бер ай элек, командирҙары аяғын һындырған, Тамерланды уның урынына тәғәйенләгәндәр. Шул Шурыгин фамилиялы командиры, Тамерлан урынында мин булырға тейеш инем, тип, илай-илай һөйләй. Алпауыттай кәүҙәле ир кеше күҙ йәштәрен йәшермәй, улымдың абруйы булған, тимәк. Шунда, Тамерландарҙың батырлығы арҡаһында йөҙҙән ашыу личный состав тере ҡалды, улар ҡыйыу булмаһа, боеприпастар ҙа көлгә осор ине, тип, беҙгә рәхмәттәр әйттеләр. Сөнки ул Герой! Һуңғы яуҙағы машинаның бер ишеген алып ҡайтып, Мәскәү эргәһендәге частарендә улым Тамерланға һәм уның менән бергә булған Дағстан егете Рехбергә мемориал астылар. Шул яуҙа улыма - Герой исеме, Рехбергә "Орден мужества" бирелә. Командирҙары әйтеүенсә, 93-сө дивизионға Тамерлан иң беренсе булып "За отвагу" миҙалын һәм Герой исемен алып ҡайта.

### Бәләкәстән ҡыйыу булды

Тамерлан бәләкәй сағында Шакир олатаһын уттан алып сыҡҡанын да һөйләйем әле. Икенсегә тормошҡа сығып, Ярлыҡапта йәшәгәндә иремдең әсәһе юҡ ине, ҡайным йортонда йәшәнек. Тамерланға ул ваҡытта 12 йәш, минең өсөнсө балаға декрет отпускаһына сыҡҡан мәл ине. Икенсе улым Рушанды етәкләнем дә, Тамерланға, олатайынды ҡарап тор, тип, Асҡарға балнисҡа киттек. Ара алыҫ түгел, төшкә урап ҡайтырға иҫәп. Барып еткәс, йомош менән почтаға ингәйнем, Ярлыҡапта Шәкировтарҙың өйө янған, тип ишетелде. Аптыраным, яңы ғына сығып киттем бит, нисек инде янып китергә тейеш, тип уйлайым. Балнисҡа инеп күрендем дә, регистратура эргәһенән үтеп барһам, ҡыҙҙар, һин ҡасан килдең, тип һорайҙар. Әле генә, тим. Шәкиров Мөхәмәтйәндең, ҡайныңдың, өйө янған, тип ишетелде, тиҙәр...

Беҙ ҡайтып етеүгә өйөбөҙҙөң дүрт тәҙрәһе генә өңрәйеп тора ине. Тамерлан шунда бит, тип, ҡотом осто. Үҙемде ҡулға алып, улымды эҙләй башланым. Әллә ҡайҙан килеп сыҡты ул, үҙе ҡоромға буялып бөткән. Ҡулына документтар тотҡан да, "Мин гәйепле түгел", тигән һымаҡ ҡарап тора. Ҡосаҡлап алдым, олатаң ҡайҙа, тим. Уны күршеләргә алып ингәндәр икән. Өй соланында иҫке генә бер холодильник бар ине, бәктиһәң, ут шунан сыҡҡан. Ҡолаҡҡа ҡатҡан олатаһы телевизор ҡарап ултырып, ут сыҡҡанын һиҙмәгән. Соландан төтөн сыҡҡанын күргән Тамерлан юғалып ҡалмаған, күршеләргә лә йүгермәгән, ут эсенә инеп, олатаһын алып сыҡҡан. Ул ғына ла түгел, кире инеп, өйҙәге документтарҙы ла алған. Бына шундай ҡыйыу ине ул минең балам!



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Тыуған илде һаҡлаусы" тигән һөнәр бар, ти, командиры заставаға яңы килгән, киләсәктә генерал буласаҡ офицерға. Беҙ бала саҡта яратып ҡараған "Офицерҙар" нәфис фильмындағы ошо һүҙҙәр бөгөн ирмен тигән ирҙәр өсөн дә тормош девизы булып яңғырай бит...**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

***✓ Яңы сумочкаһын йыртҡыларҙай булып, ҡырҡ тапҡыр ҡапшап сыҡҡандыр Нурия ханым, теге ҡатындың сабыр ҡарашы алдында. Әммә паспорт та, банк картаһы ла, бер ҡасан да булмағандай, ғәйеп булғайны затлы күн ҡумтала!***




Кесә телефоны, "тлинк" итеп, ниндәйҙер яңы хәбәр барлығын иҫкәртте. Көҙгө алдында буянып-төҙәнеп ултырған Нурия ханым урынынан һиҫкәнгән күбәләктәй осоп торҙо ла шул яҡҡа уҡталды. Телефонын тоҡандырып ҡарағас, шундуҡ яңы тәтәйгә ҡыуанған бала шатлығы балҡыны йөҙөндә. Әһә! Ғүмәренән аҡса килгән! И-лә-лә, ҡайһылай мул был юлы! Булды былай булғас!

Уның ире ҡайҙалыр алыҫта, вахтаға йөрөп эшләй. Башта самолетта Мәскәүгә оса, унан тағы ҡайҙалыр оса. Һөйләүенә ҡарағанда, эшләгән урыны ниндәйҙер һалҡын диңгеҙ буйында булһа кәрәк. Йәйен дә, ҡышын да күҙ асҡыһыҙ ел, ти, һыуы ла ҡар һыуы һымаҡ икән, ни эсерлек, ни йыуынырлыҡ түгел, хатта һабын да күпермәй, имеш. Шунда ул шофер булып эшләй, тәүлегенә ун ике сәғәт буйына ниҙер ташый машинаһында. Бер урында уралып тик йөрөйөм, шунан хатта күҙҙәрем томаланып әйләнсекләнә башлайым, тип зарлана. Етмәһә, ялға ҡайтһа, башҡаса бармайым унда, тип, мыжыҡ балалай киреләнеп аптырата! Артынан этә-төртә, тигәндәй итеп эшенә оҙата уны Нурия ханым һәр осраҡта. Үәт иҫәр, шундай аҡсалы эштән кеше ҡаса тиме ни! Ашауы ла, кейем-һалымы ла, ятағы ла буш, ә ундағы бер айлыҡ эш хаҡын бында ярты йылда ла эшләп табырмын, тимә!

Ә кисә кисләтеп Нурия ханым янына Мәүлиҙә әхирәте килеп сыҡты. Мәүлиҙә бик тә сос, үткер бисә, йыш ҡына урамға сығырға ла иренгән өйгөбәк Нурия һымаҡ түгел. Уның йөрөмәгән ере, белмәгән нәмәһе юҡ. Телефондан шылтыратып, һәр мәлдә лә йә әҙерләп ашарға теләгән салаттағы емеш-еләкте лә, йә ҡала хакимиәтендә ултырған инсандарҙың һөйәркәләрен дә исемләп белергә була унан. Шул Мәүлиҙә кис буйына сәй артында йәшел күҙҙәрен түңәрәкләп, елдәй йомшаҡ тауышы менән арбап, Нурияны ниндәйҙер бер мөғжизәле ойошмаға барырға димләне.

- О-о-о, унда, әхирәткәйем... Юҡ, мин быны һиңә һөйләп кенә һүрәтләй алмайым! Уны үҙ күҙҙәрең менән күрергә, үҙ йөрәгеңдән уҙғарырға кәрәк! Мин шунда барып кергәс тә үҙемде йәннәткә килеп юлыҡҡандай итеп хис иттем, ышанаһыңмы-юҡмы? Шундай илтифатлы, мөләйем, матур кешеләр унда, шуларҙың иҫ киткес матур мөнәсәбәтенән күңелем ирең, шундай рәхәтлек тойҙом үҙемдә! Ҡатылыҡта, меҫкенлектә уҙған бар ғүмерем күҙ алдымдан үтте, әлегәсә ошондай гүзәллектең, мәрхәмәттең, йылылыҡтың барлығын белмәүемә иҫем китеп иламһырап алдым хатта... Шул көндән һуң барған һайын барғым килеп тора шунда. Һәр барғанымда күңелем йыуанып, йөрәгем ҡыуанып ҡайтам! Шунан килеп сыҡһам, ошо фани донъялар йәмләнеп, йәшәгеләрем килеп китә, яҡшылыҡтар, изгелектәр ҡылғы килә, хатта бығаса йолҡҡослап ташларҙай булған дошмандарымда ла матурлыҡтар күреп, йылмайып ҡарайым уларға!

- Нисек инде?

- Бына шулай, Нурияҡайым! - Мәүлиҙә дымлы күҙҙәрен ҡулъяулығы менән һөртөп алды, артынса йомшарған танауын да бышҡырып ҡоротто. - Их, белмәйһең шул, башыңдан үтмәгәс, күңелеңә етмәгәс... Ултыраһың, бахырҡайым, өйөңдән сыҡмайынса тотҡон булып, айҙар буйына әллә ҡайҙағы иреңде көтөп... Беләһеңме, әхирәткәйем, унда булып сығыуҙы мин мунса кереп сығыу менән сағыштырыр инем, һиңә нисек тә аңлатыр өсөн. Тик бында тән мунсаһы, ә унда - йән мунсаһы! Аңланыңмы? Әй-й, ҡайҙан ғына аңлайһың инде, күреп белмәгәс... Әйткәндәй, нимә тип ҡоро һүҙгә ымһындырып ултырам әле һине... Иртәгә шунда барыр көнөм дәһә. Әйҙә, әхирәткәйем, минең менән, әйҙә бергә барайыҡ. Бер күреүҙән мас булырһың минең һымаҡ, мин әйтте, тиерһең! Иңрәгән йәнең ирең, талсыҡҡан йөрәгең ял итеп, яңынан тыуғандай булып ҡайтырһың!..

Шунда йыйынып йөрөүе әлеге мәлдә Нурия ханымдың. Йылҡылдап торған өр-яңы шәшке тунын, шәшке бүреген, бейек күтәрмәле күн итеген кейеп, көҙгө алдында борғолана-һырғылана. Барса алтын-көмөшөндә таҡ, эстән дә, тыштан да барса затлы кейеменде кей, тине уға Мәүлиҙә әхирәте, шундай матур, изге урында башҡалар араһында бахыр күренмә берүк. Булған хәтлем аҡсаңды ла үҙең менән ал, унда күҙ ҡыҙҙырғыс әйберҙәр күп, һатып алырһың күңелеңә ятҡанды, тине. Шуға ла, әле генә картаһына килеп төшкән Ғүмәренең аҡсаһы бик уңай, бик йәтеш булды.

Ҡарале, көҙгөләге бынауы ҡатынҡай Кәллә кемдең һөйәркәһе булырҙай ҙаһа! И-лә-лә-ә... Юҡҡа ғынамы ни, ағас күрке - япраҡ, әҙәм күрке сепрәк, тигәндәр. Ике балаһын да түләүле уҡытҡас, бик ауырға тура килә уларға һуңғы йылдарҙа. Тапҡан-ҡапҡандары балаларына китеп тора. Шуға ҡарамаҫтан, тамағынан өҙөп тигәндәй, оҙаҡ ваҡыт йыйып-йыйнап тотҡан аҡсаһынан өҫ-башына шәшке-күндән алып кейергә булдырҙы быйыл Нурия ханым. Алыуын алды ла, тик шуларҙан кейенеп-яһанып бер ҡайҙа ла сығып йөрөй алғаны юҡ. Эшкә бара ла эштән ҡайта, эше лә затлы кейемдә йөрөрлөк кәсеп түгел. Шуғалырмы, кисәге Мәүлиҙәнең өгөт-дименә ҡаршы тора алманы ул. Ысынлап та, ниңә йөрөп килмәҫкә ти ял көнөндә ҡала ҡыҙырып? Былай ҙа үтеп бара ғүмере бер ни күрмәйенсә, тиерлек, фатирының дүрт мөйөшөнә ҡарап... Икенсенән, илгәҙәк әхирәтенең йомошон нисек итеп күрәләтә кире ҡаҡһын инде? Мәүлиҙәнән игелекте аҙ күрмәне Нурия, кәрәк саҡта аҡыллы кәңәше лә, сос белешмәһе лә, үтә ҡытлыҡ саҡта аҡсаһы менән дә ярҙамы булды...

Алдан килешкәнсә, ҡала баҙарында осраштылар әхирәттәр.

- Әнә шулай, әнә шулай, әллә кемдең бисәһе! - тип йөпләне Мәүлиҙә, әхирәтенең һын-ҡиәфәтен кәләш күҙләгән яусылай булып күҙҙән уҙғарғас. Мәүлиҙә үҙе лә бөгөн баштан-аяҡ ҡаманан да күндән ине. - Тик бынауы сумочкаң... Үпкәләмә, әхирәткәйем, әммә был ҡумтаң әлеге мәлдә ханбикәнең аяғындағы сабата һымаҡ! Нисә йыл тотонаһың шуны?

- Әлләсе... Биш-алты йыл шикелле.

- Бынағыйыш! Юҡ, әхирәткәйем, бармай! Белгең килһә, ҡатын-ҡыҙ сумочкаһында уның барса зиннәте сағыла! Әйтәм даһа, беҙ барыр урын мал һарайы түгел, тип. Хан һарайы һымаҡ йорт бит ул! Шуға ла унда был ҡумтаң менән кереү - үҙеңде лә, ундағы хужаларҙы ла кәмһетеү генә! Аҡсаң бармы? Бик хуп! Әйҙә, өҫ-башыңа, һын-ҡиәфәтеңә мас килешеп торған сумочка һатып алайыҡ хәҙерҙән үк! Шундай әйберҙәр менән һатыу иткән таныш торғашым да эргәлә генә, үәт, ҡаһылай йәтеш! Бәхетең үҙеңдән алда йөрөй, ахыры, бөгөн, әхирәткәйем!

Күҙ асып-йоморға ла, ауыҙ асып һүҙ әйтергә лә өлгөрмөне Нурия ханым, әммә биш минут үтеүгә әртискәләрҙең дә күҙе ҡыҙырлыҡ иҫ киткес зауыҡлы ҡумтаға эйә булды. Әхирәте сикһеҙ ҡыуанды быға иллә, һатыусының иһә түбәһе күккә тейҙе. Ә аҡсаны һумлап ҡына шутларға күнеккән Нурия ханым, көтөлмәгән мул сығымдан иҫәнгерәп, яңы ҡумтаһының эсенә төшөп ултырырға ла, эстән генә замогын тартып бикләнергә әҙер ине.

- Әнә шулай! - тине Мәүлиҙә, тыҡ-тыҡ баҫып "хан һарайына" илткән юлға төшкәс. - Бер ҡасан да кеҫәңдәге аҡсаңды ҡыҙғанып, үҙеңә ҡарап торған яңы әйберҙән ҡасма, Нурияҡайым! Күҙең ҡыҙа икән, тимәк, ул тауар һиңә тәғәйен! Аҡса ул һыу кеүек, аға ла бөтә. Ә әйбер ҡулда ҡала! Атаҡ-атаҡ! Нимә тип хәжәте бөткән иҫке сумкаңды тотоп киләһең әле һаман?

- Һуң, йәл дәһә? Өйрәнелгән әйбер... Яңыһын, бөгөн йөрөп ҡайтҡас, ҡыҙыма бирермен, тием...

- И-и, бисараҡайым, - Мәүлиҙә атлап барған еренән туҡтап, сикһеҙ ҡыҙғаныу менән иптәшенә баҡты. - Сәпсим белмәйһең икән дәһә үҙ ҡәҙереңде, әхирәткәйем. Иҫкегә иҫе киткәндең теше ҡойола! Ҡыҙыңдың бар ғүмере алда, әллә ниҙәре булыр әле! Ташла, ташла, тием шул ыҫтырамыңды анауы мусорҡаға, килмә матур тормош алдында кәмһенеп, тоҡ йөкмәгән дөйә һымаҡ ике сумочка күтәреп!

Тағы әллә ниҙәр сутырҙаны Мәүлиҙә аңзиһенгә аңрараҡ иптәшенең башын бутап. Аптырағас, иҫке ҡумтаһындағы барлыҡ әйберҙәрен ҡул тейгеһеҙ матур, өр-яңыһына күсереп һала башланы Нурия ханым урам уртаһында торған килеш. Ә ҡатын-ҡыҙ сумочкаһындағы ваҡ-төйәк әйбер, билдәле, тик билдәле булһа ла, бүлмәле...

Нурия ханымдың теге "хан һарайы"нда кисергән тәьҫорттарын килештереп тасуирлау мөмкинме икән? Юҡтыр ҙа, сөнки уянғас та иләҫләндереп торған сихри төштө һөйләп буламы ни? Ҡыҫҡаһы, хәтерендә ҡалған өҙөк-йыртыҡ күренештәргә ҡарағанда, былай булды, шикелле.

Тыштан да, эстән дә балҡып торған бинаға барып кергәс, илтифатлы швейцар, күптәнге танышын күргәндәй, итәғәтле йылмайып, өҫ-башын һалдырҙы. Аллығөллө залда уларҙы шат йылмайып, кейәү менән кәләштәй булып кейенешкән иҫ киткес матур ҡыҙ менән егет ҡаршыланы ла зиннәтле табынға оҙатты. Унда улар һымаҡ тағы унлап кеше бар ине. Татлы шарап менән һыйланылар. Шунан һуң Мәүлиҙә әхирәте, һауала ирегәндәй, ҡайҙалыр ғәйеп булды. Уның ҡарауы, Нурия ханым янына йылҡылдап торған ҡыҙыл күлдәкле, баштан алып аяғына ҡәҙәрем алтын-гәүһәрле мөләйем ҡатын пайҙаланде. Ниңәлер, Нурия ханым уны һағынып иҫләгән күптәнге әхирәте һымаҡ итеп ҡабул итте. Шул ҡатынҡай еңелсә генә хәл-әхүәл белешеп гәпләшкәндә, нескә бармаҡтары менән Нурияның йөҙө алдында ниндәйҙер серле ымлауҙар ҡылды, шуларҙы, шаярта-көлә генә, ҡабатлауҙы һораны...

Һауала күңел иреткес моң тирбәлә... Шундай рәхәт, тыныс... Һуңынан, икәүләшеп матур залда йөрөгәндә күҙ яуын алғыс зауыҡлы һауыт-һабалар кәштәһе янына барып сыҡтылар. Шуларҙы күргәс, өйөндәге хан заманынан торған тәрилкә-сынаяҡтары иҫенә төштө лә Нурия ханымдың, шуға күңеле һыҙҙы, хатта оялды. Их, ошондағы барса нәмә, һуңғы бал ҡалағына хәтлем, уның өйөндә булһа ине... Теге ҡатынҡай ҙа уның кисерештәрен аңлап ҡалды булһа кәрәк шунда. "Был сервиздар инглиз королеваһы Елизавета ҡулланғандар менән тиң, - тине, - әммә, бик теләһәгеҙ, һеҙ ҙә тулайым һатып алырға булдыра алаһығыҙ уларҙы. Хаҡтары ла әллә ни ҡиммәт түгел, ни бары ике йөҙ мең һум ғына!" Әммә Нурия ханымдың бында өр-яңы ҡунаҡ булғанын иҫәпкә алып, ойошма уға сервиздың ярты хаҡын бүләкләй, йәғни, был һауыт-һабаны ул ни бары туҡһан туғыҙ меңгә генә алырға булдыра ала! Хәлбүки, сөнки уның был аҡсаһы упсым юғалмай ҙа, имеш, ә ойошманың банкында бүртеп ятасаҡ һәм уға өҫтәмә дивидендтар киләсәк. Ләкин, бындай дәү бүләккә лайыҡ булыр өсөн кеҫкәй генә бер шартты үтәү фарыз икән. Йәғни, Нурия ханым ошо урындан уҡ ойошма ағзаһы булырға ризалығын бирергә һәм теркәлергә, ә һуңынан үҙенең артынан тағы өс кешене ошо ойошмаға саҡырып килтерергә тейеш... Шулай иткәндә, был тауарҙарҙы бөгөндән үк ойошма хеҙмәтсәндәре үҙҙәре үк уның йортона илтеп ҡуясаҡ!

Һи-һи, шул ғынамы ни? Шул да булдымы шарт!

Ни ғиллә менәндер, "туҡһан туғыҙ мең" тигән хаҡ сүптәй генә булып күренә ине уға ошо мәлдә...

Шатлығы эсенә һыймаған Нурия ханым баяғы яңы ҡумтаһын алып, ашыға-ҡабалана шундағы паспорты менән банк картаһына һонолдо. Ҡарале, ҡайһылай уңышлы, бәхетле, матур бөгөнгө көн! Бирәһе килһә ҡолона - сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, Ғүмәренән дә "тлинк" итеп аҡса килеп төштө. Мең рәхмәт Мәүлиҙә әхирәтенә, яңғыҙлыҡтан алйыған иптәшен иҫенә алып, ошондай гүзәллеккә, йомартлыҡҡа илткәне өсөн!

Әммә, шайтан бәләһе, ҡумтала паспорт та, уның эсендәге банк картаһы ла юҡ ине...

Яңы сумочкаһын йыртҡыларҙай булып, эстән дә, тыштан да ҡырҡ тапҡыр ҡапшап сыҡҡандыр Нурия ханым, теге ҡатындың сабыр ҡарашы алдында. Әммә паспорт та, банк картаһы ла, бер ҡасан да булмағандай, ғәйеп булғайны затлы күн ҡумтала!

Аңлайышһыҙ был мәғәнәһеҙлектән тамам алйып, үҙенең йүнһеҙлегенән оялып илар хәлгә еткән Нурия ханымдың, келт итеп, бая мусорҡаға ташлап киткән иҫке сумочкаһы хәтеренә килеп төштө шунда! Ай-й-й...

Нисек итеп өҫ-башын кейеп, бынан бер саҡрым самаһы алыҫлыҡтағы теге сүп-сар өйөмөнә йүгереп барғаны яман төш һымаҡ булып ҡына иҫендә ҡалды Нурия ханымдың.

Ә бая ғына буш торған, һонолоп та буй етмәҫлек дәү сүп-сар мискәләре, баҙар янында булғанғамы, өймәләм тулып та ҡуйған шул арала. Иҫке сумочкаһын шул өс мискәнең ҡайһыныһына ташлағанын да иҫләмәй ине, ашығыу менән борсолоуҙан манма һыу булып бышлыҡҡан Нурия ханым.

Әммә, башҡа сара юҡ ине. Ҡышҡы һалҡын ҡояшта йылҡылдап торған шәшке тун-бүрекле ҡупшы ҡатынҡайҙың мусор бактарын ауҙарып, шундағы ҡый-бысраҡта соҡсонғанын күргән күмәк халыҡ ни уйлағандыр ҙа, ни кисергәндер... Ә Нурия ханымдың шул саҡтағы тойғо-хистәрен һүрәтләп тә тормайыҡ инде...

Ярай ҙа һәүетемсә генә эҙләнергә форсат бирһәләр. Бер мәлдә асыуынан күҙҙәре шарҙай булған дворник әбей килеп ябырылды.

- Ты че, дура! Ниңә мискәләрҙе ауҙараһың, кем был ҡыйҙы кире һалыр? Кит бынан, көрәк менән ялпаштыра һуҡмаҫ борон! - тип ажарланып өҫтөнә менеп килгән ҡарсыҡтың, ҡулына меңле аҡса тыҡҡас ҡына, өнө тығылды.

Был әшәкелә бысрана күрмәһен берүк, тип яңы ҡумтаһын үҙенән ситкәрәк, таҙа көрткә ҡуйғайны Нурия ханым. Бер саҡ,

ИНТЕРНЕТТАН



# ШӘКӘР ИММУНИТЕТТЫ ҠАҠШАТА

■ Өлкәнәйә барған һайын кешенең мускул массаһы кәмей. Ғалимдар был күңелһеҙ күренештең сәбәбен асыҡлаған. Америка ғалимдары мускул көсһөҙләгәнә килтергән аҡһым өлгөһөн тапҡан. ATF4 аҡһымы мускул аҡһымы синтезын ҡыҫҡартып, һөлдә мускулдары генына тәьҫир итә. Белгестәр ATF4 әүҙемлеген баҫыусы ике тәбиғи компоненты асыҡлаған - уларҙың береһе алмала, икенсеһе йәшел помидорҙарҙа. "Карт кешеләр мускулдарҙың көсһеҙлөгө менән яфалана. Алмалағы урсол кислотаһы менән йәшел помидорҙағы томатидин был процессы туҡтатып тора ала", - ти тикшеренеүҙәрҙең авторы Кристофер Адамс.

■ Чипсы, ҡыҙҙырылған тауыҡ, балыҡ, картуф, шулай уҡ майҙа бешкән бәлештәр простата яман шешенә килтереүе ихтимал. Тышы кетерләп торған тәмле тауыҡ ҡанаттары менән боттары Америкалағы иң популяр ризыҡтар. Уларҙы һәм картуф чипсылары, майҙа бешкән бәләкәй ҡабартмалар Европала ла киң билдәле хәҙер. Әммә күптән түгел Сиэтлдағы яман шеш яуырыуы тикшеренеүҙәре үҙәге ғалимдары асыҡлауынса, бындай аш-һыу ир-егеттәр өсөн айырыуса хәүефле. Майҙағы канцероген матдәләр - альдегидтар, гетероциклик аминдар яман шешкә килтерә.

■ Ҡайнар какао ҡарттарҙың хәтерен яҡшырта, ти Гарвард университеты ғалимдары. Улар был эффектты какао составындағы флавоноидтарға япһара. Экспериментта уртаса йәштәре 73 йәште тәшкил иткән бер төркөм ҡатнашҡан. Уларҙың өстән бер өлөшө баш мейеһе ҡан әйләнеше боҙолоуы менән яфаланған. Тейешле тикшеренеүҙәр үткәндән һуң, улар бер ай буйына көн һайын 2 стакан ҡайнар какао эскән. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, баш мейеһенең ҡан әйләнеше 8 процентҡа яҡшырған. Какао ҡартайыу һөҙөмтәһендә мейелә барған кире процестарҙы яйлата, неврологик тайпылыштар хәүефен түбәнәйтә.

■ Британия ғалимдары мәғлүмәттәренә ярашлы, иртәнге зарядка ябығыуҙың эффектын 20 процентҡа күтәрә. Тик күнегеүҙәр ас ҡарынға башҡарылырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 12 ир-егет ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө спорт менән ас көйөнә, бер өлөшө иртәнге аштан һуң шөғөлләнгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, иртән спорт менән шөғөлләнеүселәрҙең көн дауамында калориялы ризыҡ ашарға теләге булмай, улар асығып та бармай. Ә бына ас көйөнсә спортзалға йүнәлеүселәр уларға ҡарағанда 20 процентҡа калорияларҙы күберәк яндыра.

■ Шәкәрҙе артыҡ ҡулланыу иммунитетты ҡаҡшата. 100 грамм шәкәр ҙә (шул иҫәптән фруктоза менән глюкоза ла) ҡандың аҡ тәнсәләренең зыянлы микроорганизмдар менән көрәшеү һәләтен түбәнәйтә. Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә. Инфекцияла ауырыуҙар менән яфаланыусыларға бөтөнләй татлы ризытар ашарға ярамай. Шулай уҡ һуттар ҙа зарарлы, сөнки уларҙың составында глюкоза бар.

КИНӘЙӘ

# ҺҮҘ ҠӨҘРӘТЕ

Оҙон бер урамдан торған ауылыбыҙҙың урта тошонда туҡһанын тултырып йөҙ яғына ынғайлаған Нәғимә исемле инәй йәшәне. Асыҡ мөләйем йөҙлө, ипле мөғәмәләле, үтә сабыр фиғелле кеше ине ул, ә мөләйемдәр, ғәҙәттә, бар йәһәттән дә ылыҡтырғыс һылыу булалар. Әйткәндәй, мәрмәрҙәй шыма юнылған, камил йөҙлө сибәрҙәрҙе лә осраткылаһым; иллә улар ҡырау һуҡҡан сәскәһеҙ үҫемлек, емешһеҙ, ҡыҫыр ҡыуаҡ ишеләр, ә Нәғимә инәйҙең күңеле шау сәскәле, оҙон ғүмерле йәшәүе мул емешле булды.

Уның бик тә күркәм ике ғәҙәте хәтерҙә уйылып ҡалған; артынан шыуған ыштанһыҙ ир баланың да, быуынға ултырған ир-егеттең дә, бил ныҒытҡан уҙамандың да, ҡартлығы еткән олоноң да һис ҡасан юлын арҡыры ҡыйып үтмәне, ир-атҡа күрһәткән ихтирамы, хөрмәте шул саҡлы ла юғары кимәлдә булғандыр, күрәһең. Хоҡтона һеңгән икенсе ғәҙәтенә килгәндә - урам яҡҡа ҡараған шаҡарма ҡапҡаһының ауыҙына сығып, ярпайып баҫа ла, ҡарашына салынған ауылдаштарын йылмайып, үҙе башлап сәләмләй: һаумы, балам, имен генә йөрөп ятаһыңмы, улым, әссәләмәғәләйкүм, ҡустым, күрше, килен, ҡыҙым, ҡоҙаса, ҡоҙағый, әхирәт. Шулайтып осраған береһен берәмтәлләп теүәлләп сәләмләй, һәр береһенә тегеләрҙең күңелдәре теләгәндәрҙе ишеттереп әйтеп йәндәренә мул итеп ҡөҙрәтле "һүҙ ҡустәнәс"ен йомдороп оҙата. Тормош, тигәнең күп яҡлы, осло-ҡырыйлы, гел көләп-йылмайып ҡына ла йәшәп булмай, әммә инәйебеҙ бер ваҡытта ла атҡан таңға, ағымдағы көн барышына йөҙөн ризаһыҙ сирып баҡманы, эсендә хәсрәт уты ҡайнаһа ла уны эсенә йота, йәшерә белде, уфтанманы, ауыҙындағы һуңғы ризыҡын башҡаларға өҙөп ҡаптырып, әле әйтеп үткәнемсә, ян-тирәһенә яҡшы һүҙ, игелекле сәләм юллап йәшәне.

Берәй әҙәрем сәфәргә сығырға йыйынһам, Нәғимә инәйҙе тап иткем килде гел генә, ул ҡаршыңа сығып оҙатып ҡалдымы - ниәтләгән эшең мотлаҡ урын ерене етә, юлың уңа. Ә кеше һуҡмағына теймәү, уны ынғайға әүерелдерә, йүнәлдерә белеү - бик һирәктәр өлөшөнә тәтегән игелекле һәләт.

Шулай итеп, Нәғимә инәй ауылыбыҙҙың йәме, хатта өҫтәп әйтер инем, тере ҡото булды.

Бер көн танышым минә былай тип шылтыратты: "Ауылдаштарынды өй беренсә теҙеп маҡтайһың, күктәргә сөйәһең, улар барыһы ла шулай һәйбәт кешеләр инеме әллә?" "Эйе, һәйбәттәр, кешелеклеләр, иманлылар ине, ни тиһәң дә улар яҡшымы-яманмы, минән яҙыусы яһанылар, ә инде күҙгә эленмәгәндәре, күңелгә һеңмәгәндәре иҫемдә ҡалмаған".

Серем итеүҙең, аҙға ғына әүелйеп күҙ йомоп алыуҙың ни икәнлеген белмәгән бер торлаҡ бар ер йөҙөндә, ул - дауахана. Аһ-зар, ыңрашыуҙар, һыҙланыуҙар һеңгән ерҙән тыныслыҡ, һиллек ҡасыусан, уның урынын шөбһәләнеүле шик, борсолоуы хәүеф биләй. Ҡултыҡ таяҡтарына аушайып, ауырлыҡ менән, яңы айтай баҫҡан балалай, баш ҡала дауаханаларының береһендәге травмотология бүлегенең коридорынан аяҡтарымды һөйрәйем, ҡара тиргә батып, көсләп, үҙемде мәжбүр итеп һөйрәйем, ә шулай ҙа аңыма һеңгән күркәм ауыл ғәҙәтенә ярашлы осраған береһенә, Нәғимә инәй һымаҡ йылмайып, донъяһы түңәрәк, бөтөн, көнитмеше теүәл кешеләй баш ҡағам: "доброе утро!" "хәйерле иртә!" "здравствуйте!" "очень рад, что вы идете на поправку!" "приветствую вас!" Тап булған сирлеләрҙең, аҡһаҡ-туҡһаҡтарҙың яуап ҡайтарыуҙары, уларҙың бөтәһен танып-белеү кәрәк тә, мөһим дә түгел; быныһ, көтмәгәндә, хәстәхана йортонда тап булыштыҡ бит, ул йөрөп ята, мин дә тырышып-тырмашып атларға маташам - иң ҡәҙерлеһе ана шулдыр әлеге мәлдә.



"Ваҡытынан алда аяҡтарығыҙҙы көрәгенән артыҡ көсөргәндерәһегеҙ!" - тип дауалаусы табип тороп йөрөмәҫкә ҡушып, түшәгемә һалып ҡуйҙы.

Кискәре оло ғына йәштәрҙәге рус ҡатыны палата ишеген ҡыҫып, башып тыҡты:

- Добрый вечер!
- Это вы мне? Вечер добрый!
- Говорят вы писатель?
- Они преувеличивают мое предназначение; Достоевский, Толстой, Чехов, Шолохов, Шукшин, - ҡулымдағы китапты күрһәттем, - Валентин Распутин большие писатели, а я лишь поклонник, ценитель их творчества.
- Вас тут все так называют.
- Тогда как хотите величать, так и назовите: "как вы лодку назовёте, так она и поплывет!" - Күңелһеҙ йылмайҙым.
- Знаете, зачем заглянула я к вам, как изчезли из поля зрения, больным не стало хватать вашего доброго, искреннего приветствия, они как целебное лекарство, вы как будто распространяете, оставляете после себя лучик света, искру надежды, честное слово, это так!

Бына нисек, баҡтиһәң, тормош ваҡлыҡтарына, урынһыҙ ығы-зығыларға, көндәлек мәшәҡәттәргә ҡул һелтәгән дауахана сирлеһенә бөгөн аҡса ла ҡиммәтен юғалтҡан ҡығыҙ кисәге кеүек, байлыҡ та кәрәк түгел, уға ихлас әйтелгән, сәләмәтләндергес, терелткес тылсымлы һүҙ етмәй икән дә баһа!

Доброе слово - целебное лекарство. Хаҡ әйтелгән һүҙҙәр. Минә ҡалһа һүҙҙәрҙең йәне бар, улар тереләр. Әҙәм ауыҙынан ишетелеп таралған аҡлы-ҡаралы һүҙҙәр беҙҙең тирә-яғыбыҙҙы уратып алғандар, болоттарҙай башыбыҙ өҫтөндә аҫылынғандар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың зәһәрҙәре, ағыулылары күбәйеп китте һуңғы осорҙа, шуға ла йәшәйешебеҙҙән ҡот, ҡапҡан ризығыбыҙҙың кейәһе етеп, унан бәрәкәт ҡасты, ҡотбәрәкәтһеҙ йәшәү - мәғәнәһеҙ, маҡтаһыҙ, хыялһыҙ көн итеүгә тиң. Ҡараны таратырға, ҡараны тағы ла ҡарайтырға тырышыусылар, үт төкөрөүселәр былай ҙа етерлек, ә минең уйымда, аңымда берләштереүсе, бөтән итеүсе, яҡтыға, юғарыға әйҙәүсе, сихәтләндереүсе, кешене кешегә яҡынайтыусы илаһи ҡөҙрәткә эйә һүҙҙәр.

Түшәгемдән ауырлыҡ менән ҡалҡынып, кафель иҙәнле, цемент стеналы, таш түшәмле, ярым ҡараңғы оҙон лабиринт буйлап, йылы, яҡты, нурлы, алтын-көмөшкә бәрәбәр теләктәремде ҡаршымда осрағандарға "һүҙ ҡустәнәс"е итеп, уларҙы яҡшылыҡ, игелек көтөп ҡорғаҡһыған өмөттәренә төрөп өләшеп, алға уҡталдым: "добрый вечер!" "завтра утром взойдет солнце, и оно обязательно будет добрым!" "барына шөкөр итәйек..." "йәшәйек әле, йәшәйек, Хоҙай бүләге был танһыҡ, ожмахҡа тиң донъянан кем туйған!.."

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# ҮҘ-ҮҘЕҢДЕ БЕЛӘҺЕҢМЕ?



**Америка яҙыусыһы Дороти Бранд үҙенең китабында баш мейеһе өсөн бер нисә ҡыҙыҡлы күнегеү тәҡдим итә. Улар кешене өйрәнгән мөхитенән сығарыу, икенсе төрлө перспективаларҙы, хатта икенсе төрлө ысынбарлыҡты күрһәтеү, ижади ҡараш талап ителгән ситуациялар тыуҙырыу өсөн тәғәйенләнгән.**

*1.* Көнөнә 1 сәғәтте бер нәмә лә әйтмәйенсә генә, бирелгән һорауҙарға ҡыҫҡа ғына яуаптар биреп уҙғарығыҙ. Шул уҡ ваҡытта, әйләнә-тирәгеҙҙәге кешеләр һеҙҙе нимәгәлер үпкәләгән йәки кәйефе юҡ, шуға һөйләшмәй тип уйламаһын, үҙегеҙҙе тәбиғи тотоғоҙ. Бер кемгә лә бер ниндәй ҙә иҫкәртеү яһамағыҙ, һеҙҙән мәғлүмәт алырға тырышыусыларға ла иғтибар итмәгеҙ.

*2.* Көн һайын 30 минут буйына бер предмет хаҡында уйлағыҙ, башҡа нәмәгә әүрәмәгеҙ. Килеп сыҡмаһа, күнегеүҙе 5 минуттан башларға була.

*3.* 15 минут "мин, минә, минеке" тигән һүҙҙәр ҡулланмайынса һөйләшергә тырышығыҙ.

*4.* Кешеләр менән тулған теләһә ниндәй бинаға инер алдынан тупһаһында туҡтап, уның ҙурлығын баһалағыҙ.

*5.* Яңы танышығыҙ һеҙҙең менән аралашҡанда тик үҙе тураһында ғына һөйләһен, тик быны үҙе һиҙмәһен. Ул саҡ ҡына ситкә тайпыла икән, әңгәмәне кире үҙ юҫығына ҡайтарығыҙ.

*6.* Маҡтанмайынса, зарланмайынса, әңгәмәсендә ялҡытмайынса тик үҙең тураһында ғына һөйләп ҡара.

*7.* 2 сәғәткә план төҙө һәм уны теүәл үтә.

*8.* Үҙенә 12 осраҡлы талап ҡуй, мәҫәлән, 20 саҡрымды йәйәү үтергә, 12 сәғәт ашамаҫҡа, тәшкә ашты ғәҙәти булмаған урында ашарға, көнө буйы бер нәмә лә әйтмәҫкә, төнөн йоҡламаҫҡа, ә эшләргә, һ.б.

*9.* Көн дауамында бөтөн тәҡдимдәргә ыңғай яуап бирергә.

Яҙыусы билдәләүенсә, был күнегеүҙәр тәү ҡарашҡа ҡыҙыҡ, әммә файҙаһыҙ тойолһа ла, улар тормошоғоҙға төрлө яңылыҡтар индерәсәк һәм үҙегеҙҙе яҡшыраҡ белергә ярҙам итәсәк.

БЕҘҘЕҢ БАЛАЛАР



# ЫРЫУҘАРЫН ДА ТАНЫНЫЛАР

**Баш ҡаланың 194-се балалар баҡсаһында башҡорт телен, халҡыбыҙ йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеүгә һәм рухи балалар тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирелә.**

Йыл да "Ҡояшҡай" төркөмөндә Башҡорт теле көнөнә арналған тематик аҙна үтә. Был аҙна ла "Өләсәйем мәктәбе" асыҡ дәресе менән башланып китте. Балалар башҡорт теленә һәм батырҙарға бағышлап, башҡортса шиғырҙар, йомаҡтар систеләр. Яратып уйнаған "Тирмә", "Ҡурай" уйындарын уйнанылар һәм төрлө йолаларҙы иҫкә төшөрөп, "Ат сабышыу", "Арҡан тартыу" кеүек башҡорт халыҡ уйындары менән таныштылар.

Ноябрь айында балалар баҡсаһында атай-әсәйҙәр менән берлектә "Шәжәрә байрамы" сараһы гөрләп үтте. Байрамды төркөмдәге өләсәй Фәрхәнә Ғарифулла ҡыҙы башлап ебәрҙе. Был байрам "ырыу", "шәжәрә", "ғаиләә" төшөнсәләрен асырға, үҙ ырыуы тарихы менән ҡыҙыҡһыныу уятырға, шәжәрә тураһында күҙаллауҙы формалаштырырға, ғаиләнең бөтә ағзаларына, өлкәндәрҙең хеҙмәтенә ихтирамлы мөнәсәбәт тәрбиәләргә булышлыҡ итте. Аҙаҡ шул бәләкәстәр ауыҙынан "Мин шул, шул ырыу кешеһемен" тип һөйләнгәндәрен ишетеү беҙҙең тәрбиәселәргә лә күңелле булды. Сарала Ишбулатовтар, Ғимаевтар һәм Рәхмәтуллиндар үҙҙәренең шәжәрәләре менән таныштырҙылар һәм уның тарихы тураһында һөйләнеләр.

Беҙҙең 194-се балалар баҡсаһы төүге тапҡыр "Урындағы башланғыстарға ярҙам итеү программаһында" (ППМИ-2026) ҡатнашырға булды. Билдәле булыуынса, был программа йәмәғәт инфраструктураһы объекттарын төҙәкләндереү һәм ремонтлау менән бәйле мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлтелгән. Шуға күрә балалар баҡсаһы биләмәһендә асфальт япмаһын алмаштырыу буйынса өҫтөнлөклө проблеманы ППМИ конкурсына ҡуйырға тәҡдим ителде. Программа аша үҙ идеяларын тормошҡа ашырыу инициаторҙары булып 194-се балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүселәрҙең ата-әсәләре һәм Әй урамындағы 91-се күп фатирлы йортта йәшәүсе вайымһыҙ булмаған кешеләр сығыш яһаны. Йорт советы рәйесе етәкселегендә инициатива төркөмөнөң беренсе ултырышы үтте, ул конкурста артабан тырышып ҡатнашыу һәм йорт халҡы, хеҙмәткәрҙәр, балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре һәм ата-әсәләре менән үткәреләсәк саралар планлаштырылды.

Дөйөм тырышлыҡ менән балалар баҡсаһын матур, уңайлы һәм хәүефһеҙ итәсәкбеҙ. Беҙҙең көс берҙәмлектә, тик бергәләп кенә тирә-яҡ донъяны яҡшырта аласаҡбыҙ!

**Азалия БАЙМЫРҘИНА,**
**194-се балалар баҡсаһы мөдире.**

ҮӘТ, ҠЫҘЫҠ!

# МИН ҺЫҘҒЫРҘЫМ...

## ә һандуғас тыңланы

Йәйҙең бер көнөндә баҡсамда эшләп йөрөйөм. Сейә ағастары араһын иҫке япраҡтарҙан, сүп-сарҙан, башҡа ҡый-фәләндән таҙартыу менән мәшғүл булып, аңғармаҫтан һандуғас ояһына яҡын килгәнмен. Бер заман һандуғас, ризаһыҙлыҡ белдергәндәй, минең эргәмдә пырылдап оса башланы. Йәнәһе, минең ояма зыян килтереп ҡуйма! "Мин һинең ояңа тейергә йыйынмайым, борсолма, хәҙер ошо тирәне таҙартып бөтәм дә китәм", - тип мығырҙанған булам. Әммә һандуғас бер туҡтауһыҙ баш осомда осоуын дауам итте. Бер ҙә ҡурҡыуҙы белмәй икән, хатта битемә бәрелә яҙып, бәрелә яҙып оса был бәләкәй генә йән эйәһе. Ә минең бер ҙә ҡошсоҡто ҡурҡытҡым килмәй, шуға күрә яғымлы ғына һөйләшергә тырышып, үҙемсә уны тынысландырылыҡ һүҙҙәр әйткән булам. Тик ҡошсоҡ минең кеше телемдә аңларға теләмәй...



Шунан баяғы ҡошсоҡҡа көләмһерәп ҡараным да, былай тинем: "Һин, һандуғас, данлыҡлы йырсы ҡошсоҡһың бит инде. Беҙҙә, башҡортта, хатта һиңә арналған йыр ҙа бар. Һин быны белмәйһеңдер ҙә әле. Ҡана, мин һиңә йырлап ишеттерәйем", - тип, бигүк шәп йырсы булмаһам да, "Һандуғас" йырын, аҙаҡ тағы "Азамат"ты йырлап ишеттерҙем ҡошсоҡҡа. Тик ҡошсоҡ минең йырҙы оҡшатманы шикелле. Һаман пырылдап баш осомда осоуын белде.

Уға бер аҙ аптырап ҡарап торҙом да, "Кана әле мин һиңә "Һандуғас" йырын һыҙғырып ишеттерәйем", тип, көйҙө һыҙғыра башланым. Ҡошсоҡ ҡапыл ғына осоуынан туҡтап, эргәмдәге ағастың ботағына ҡунды һәм башын ҡырын һалып, тын ғына тыңлай башланы. Мин һыҙғырыуымды дауам иттем. Оҙон көйҙө һыҙғырыу ярайһы ғына ҡыйын икән дә. Әммә мин көйҙө аҙағынаса һыҙғырып бөтөрә алдым. Ҡошсоҡ баяғы ботағында ҡымшанмай ҙа тыңлап ултырҙы. Мин тырмама таянып тороп, дөртләнеп китеп ҡошсоҡҡа "Һайра, һайра, һандуғасым..." тигән икенсе йырҙы һыҙғыра ла башланым. Быныһы, замана йыры, оҙон көй түгел, еңелерәк бирелдә.

Шулай итеп, мин һандуғасҡа биш-алты башҡорт йырын һыҙғырып ишеттерҙем дә, "Ярар, ҡошсоҡ, минең эшен берәү ҙә баҡсаны таҙартмаҫ, эшемде дауам итәйем", тип, икенсе урынды таҙартырға күстем. Тик һандуғасҡа минең, һыҙғырыуҙан туҡтап, икенсе урынға күсеүем оҡшаманы, шикелле. Ул минең арттан эйәреп, икенсе урынға килеп етте һәм эшләргә ҡамасаулап, йәнә йә баш осонда әйләнде, йәиһә аяҡ аҫтымда ералды. Аптырағандан, туҡтап, мин уға тағы башҡортса оҙон көйҙәрҙе һыҙғыра башланым. Ҡошсоҡ ботаҡҡа күсеп ултырып, тағы башын ҡырын һалып, мине тыңлай башланы. Әллә был мөхлүк башҡорт йырын аңлай инде, тип аптырап та ҡуйҙым.

Һыҙғырып тороп, тамаҡ нығ кибеп китте, һыуһаткайны. Көн йылы, ҡояшлы, өйөмдөң асыҡ тәҙрәһе төбөндә сәй эсергә ултырҙым. Әммә, бына ҡыҙыҡ, теге һандуғас асыҡ тәҙрәгә килеп ҡунды ла, мине күҙәтә. Сәй эсеп бөтөп, бер аҙ ял итеп алғас, баҡсаға сыҡтым. Бәй, теге ҡошсоҡ тағы баш осонда әйләнеп оса башланы. Аптырап, эскәмйәгә ултырып, тағы бер нисә көй һыҙғырҙым. Ҡошсоҡ һыҙғырыуҙы ишетеү менән, башын ҡырын һалып, тағы миңә ҡарап ултыра башланы...

Бәлки, ысынлап та, аңлайҙыр был йырсы ҡош башҡорт йырын, тигән уй килде шунда башҡа. Тик бына урыҫса йырҙарҙы һыҙғырып ҡарарға баш етмәгән. Тыңлар инеме икән? Башҡорт йырҙары әҙәм балаһының Урал тәбиғәте гүзәллегенә һоҡланыуынан тыуған моң булараҡ, ошо Урал тәбиғәтенең бер йәнле өлөшө булған ҡошсоҡҡа, бәлки, яҡындыр? Быны нисек беләһең инде. Әммә баҡсамдағы һандуғас мине оҙаҡ уйланып ултырырға мәжбүр итте. Бәлки, минән башҡа икенсе берәй кешенең дә һандуғасҡа башҡорт йырҙарын һыҙғырып ишеттергәне барҙыр? Булмаһа, тикшереп ҡарағыҙ әле...

**Закирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һары сәпсек**
**(Желтая трясогучка)**



Сәпсектәр - оҙон ҡойроҡло, бик матур кәүҙәле ҡоштар, саҡ ҡына турғайҙан бәләкәйерәк. Билдәһе - ҡойроғон гел генә бәүелтеп йөрөй. Бар төрҙәре лә тиерлек һыу булған ерҙәрҙе үҙ итә, был уның бөжәктәр һәм башҡа ваҡ умыртҡаһыҙҙар менән туҡланыуы менән бәйле.

Һары сәпсектең баш түбәһе көлһыу, кәүҙәһенең ҡорһаҡ өлөшө һары. Арҡаһы көлһыу йәки йәшкелт. Ҡаштары асыҡ төҫтә. Аяҡтары ҡара. Ҡыуаҡтарға, бейек үләндәргә ҡунырҡа ярата.

Йәш ҡоштар йәйен ерән-көрән төҫтә була, ә бына август тирәһендә инә ҡоштарҙың төҫөнә инә - ҡорһағы һарғая башлай.

Тауышы башҡа сәпсектәргә ҡарағанда яғымлыраҡ. Йыры ябай, талғын, ул "цлив, цив, цив" тигән өндәрҙән тора. "Цли", "срит", "цррии", "сив-рив", "псй-ит" тип саҡыра. Осҡанда ла, бала ашатҡанда ла, хәүефләнгәндә лә йышыраҡ ҡысҡыра. Ә бына һирәгерәк йырлай.

Бөтөн Европала таралған, Азияла ғәҙәти ҡош. Бик күпләп йәшәгән төбәктәре бар.

Ҡар ирегәс тә ҡайта. Ялан һәм үлән мул үҫкән һаҙлыҡтарҙы, дымҡыл ярҙарҙы ярата. Ата ҡош һаксы, йышыраҡ бейек урынға ҡунып, тирә-яҡты күҙәтә. Берәй хәүеф тыуа икән, күрше ояларҙың аталары ла уның янына бер урынға йыйыла һала. Оялары ерҙә, уны үләнгә, түнгәктәргә, ҡыуаҡтарға, хатта малдың кипкән тиҙәгенә лә ышыҡлап ҡоралар. Үләндән үрелгән, төбөнә хайуан йөнө түшәлгән. 3-8 йәки 5-6 йомортҡа һала. Инә ҡош үҙе баҫа, үҙенә ризыҡты ла үҙе хәстәрләй. Ата ҡош иһә йыртҡыстарҙы күҙәтә, территорияһын һаҡлай. Ә бына бәпкәләрҙе икәүләп ҡарайҙар. Улар ояла 11-14 көн ултыра.

Һары сәпсеке 1962 йылда Асылыкүл тирәһендә күрҙек. Шул уҡ йылда Шишмә, Дәүләкән, Бөрө, Кушнаренко, Саҡмағош һәм Өфө райондарында осраттыҡ. 30-50 ҡоштан торған һары сәпсек тубын 1963 йылда Оло Учалы күле тирәһендә күҙәттек, киләһе йылына ла бында ҡоштар осраны. Өфөнөң хәҙерге Р. Зорге урамындағы элекке аэропорт территорияһында 1963 йылдың 27 майында бала сығарған һары сәпсектәрҙең бер нисә парын теркәнек. Республиканың төньяҡ-көнсығышында һирәк осрай. Урал арьяғы күлдәрендә ғәҙәти ҡош.

Йәй уртаһында оло ҡоштар ҙа, йәштәре лә төркөмгә тупланып, һыу ятҡылыҡтары тирәһендә йәшәй башлай. Көҙ еткәнгә тиклем үк ҡышлау ерҙәренә осоп китеп бөтә. Кавказ арьяғында, Үҙәк һәм Көньяҡ Африкала, Көньяҡ Азияла ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



### 15 ДЕКАБРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 1.00, 1.40, 2.20, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.50 Д/ф "Дело декабристов". [12+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Москва слезам не верит. Всё только начинается". [16+]
23.55 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Каменская". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Профилактика на канале с 07.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Формула здоровья. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 О чем молчат Памятники. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**0.00 Х/ф "Жандарм из Сен-Тропе". [6+]**
**1.45 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

### 16 ДЕКАБРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Москва слезам не верит. Всё только начинается". [16+]
23.55, 0.40, 1.20, 2.00, 2.35, 3.05, 3.20, 3.55, 4.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Каменская". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Х/ф "Хрустальная ловушка". [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [12+]**
**11.15 Квадратные метры. [12+]**
**11.30, 16.30, 20.15 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 4.30 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Креативный код. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.50 Хоккей. "Ак барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.00 Х/ф "Жандарм в Нью-Йорке". [6+]**
**1.45 Спектакль "Мама приехала". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 17 ДЕКАБРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Москва слезам не верит. Всё только начинается". [16+]
0.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.05, 1.45, 2.20, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Каменская". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Х/ф "Хрустальная ловушка". [12+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Экологично. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Үткән гүмер. [12+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**18.50 Баскетбол. Суперлига. "Динамо" (Уфа) - "Динамо" (Приморский край Чемпионат России.**
**21.00 Защитники Отечества. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байык-2025. [12+]**
**0.00 Х/ф "Жандарм женится". [6+]**
**1.45 Спектакль "Эх, друг Байтимер..". [12+]**
**3.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 18 ДЕКАБРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Москва слезам не верит. Всё только начинается". [16+]
0.00 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2026. Танцы. Пары. Короткая программа. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
1.35, 2.15, 2.50, 3.05, 3.30, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Каменская". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Х/ф "Хрустальная ловушка". [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 20.15 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Формула здоровья. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 4.30 О чем молчат Памятники. [12+]**
**17.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.50 Хоккей. "Северсталь" (Череповец) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.00, 4.00 Республика LIVE. [12+]**
**0.30 Х/ф "Жандарм и инопланетяне". [6+]**
**2.15 Спектакль "Земляки". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 19 ДЕКАБРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Время покажет". [16+]
10.35, 11.25 "Большая игра". [16+]
11.00, 13.30 Новости (с субтитрами).
12.15, 17.00 Информационный канал. [16+]
14.00 Итоги года с Владимиром Путиным. Прямая трансляция.
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера сезона. "ДОстояние РЕспублики". [12+]
23.45 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2026. Женщины. Мужчины. Короткая программа. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
2.05, 2.40, 3.20, 4.00, 4.35, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 13.00, 19.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.00 Итоги года с Владимиром Путиным. Прямая трансляция.
20.10 Вести-Башкортостан.
20.30 Х/ф "Последний богатырь: Корень Зла". [6+]
22.45 Х/ф "Лёд-2". [6+]
1.10 Х/ф "Стрельцов". [6+]
2.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Х/ф "Хрустальная ловушка". [12+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Башкорт йыры-2025. [12+]**
**21.15 "95 лет Башгау". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15, 3.45 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 Ҡурай-шоу. [12+]**
**0.00 Х/ф "Жандарм на прогулке/ Жандарм на отдыхе". [6+]**
**2.00 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 20 ДЕКАБРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Его звали Майор Вихрь". [16+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.05 Д/ф "Ким Филби. "Тайная война". [16+]
15.00 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [16+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2026. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
22.45 Д/ф "Вся жизнь - игра". К 95-летию со дня рождения Владимира Ворошилова. [12+]
23.40 Х/ф "Болеро. Душа Парижа". История шедевра Мориса Равеля. [18+]
1.50, 2.25, 3.05, 3.40, 4.20, 4.55, 5.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Х/ф "Последний богатырь: Корень Зла". [6+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Мало для счастья надо". [16+]
0.40 Х/ф "Когда солнце взойдёт". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Весело живем! [12+]**
**8.45 Аль-Фатиха. [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 Ҡурсаҡ. [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Преград. Net. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань). КХЛ.**
**19.00 Новости (на баш. яз).**
**19.30 Генералы Башкортостана. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Байык-2025. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 6.00 Республика LIVE. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Башкорт йыры-2025. [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Х/ф "Жандарм и жандарметки". [12+]**
**2.15 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**4.15 Письма солдатам. [12+]**
**4.45 Дуҫтар. [12+]**
**5.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

### 21 ДЕКАБРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Д/ф Премьера. "Неукротимая пани Моника". К 100-летию со дня рождения Ольги Аросевой. [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Будем жить!". [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.05 Д/ф Премьера. "Чудеса спасения". [12+]
15.00 Х/ф "Далекие близкие". [16+]
16.45 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2026. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "Три аккорда". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Вызов". Национальная премия в области будущих технологий. Церемония награждения. [12+]
0.40 "Горячий лед". Чемпионат России по фигурному катанию 2026. Мужчины. Произвольная программа. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
1.50, 2.30, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00 Х/ф "Лёд-2". [6+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.00, 19.00 "Песни от всей души". [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Х/ф "Стрельцов". [6+]
3.16 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Читаем с Грамотейкой. [6+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 16.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 Асыш. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Все песни о прекрасном... [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.30 Преображение. [12+]**
**18.15 "95 лет Башгау". [12+]**
**18.30 Д/ф "Шульган-таш. Путь в ЮНЕСКО". [12+]**
**19.00 Креативный код. [12+]**
**19.30 Әлләсе. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Торжественный вечер, посвященный 85-летию Союза композиторов РБ. [12+]**
**1.45 Х/ф "Дорогая Зои". [16+]**
**3.15 Спектакль "Трамвай "Желание". [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1447 һижри йыл.*

| Ноябрь (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (24) дүшәмбе | 7:45 | 9:33 | 13:30 | 15:02 | 16:49 | 18:37 |
| 16 (25) шишәмбе | 7:46 | 9:34 | 13:30 | 15:02 | 16:49 | 18:37 |
| 17 (26) шаршамбы | 7:47 | 9:35 | 13:30 | 15:02 | 16:50 | 18:37 |
| 18 (27) кесе йома | 7:48 | 9:36 | 13:30 | 15:02 | 16:50 | 18:37 |
| 19 (28) йома | 7:49 | 9:36 | 13:30 | 15:03 | 16:50 | 18:38 |
| 20 (29) шәмбе | 7:50 | 9:37 | 13:30 | 15:03 | 16:51 | 18:38 |
| 21 (1) йәкшәмбе | 7:50 | 9:38 | 13:30 | 15:03 | 16:51 | 18:38 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *Хоҙайҙан һуң беҙ ҡатын-ҡыҙ алдында бурыслы: ул тәүҙә беҙгә ғүмер бирә, һуңынан шул ғүмерҙе мәғәнәле итеүгә бар көсөн һала.*

*(Каролина Бови).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 14 ДЕКАБРЬ - БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨ

**Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү маҡсатында булдырылған мөһим көн был. Ул Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров указына ярашлы 2019 йылдан башлап рәсми рәүештә билдәләнә.**




Башҡорт теле көнө нәҡ 14 декабрҙә байрам ителеүе бөйөк мәғрифәтсе шағирыбыҙ Мифтахетдин Аҡмулланың исеменә бәйле булыуы барығыҙға ла яҡшы мәғлүм. Туған телебеҙҙең киләсәге - һәр кемебеҙҙең ҡулында икәнен дә беләһегеҙҙер.

Ә беҙ был юлы башватҡысыбыҙҙы башҡорт теленең диалекттарына һәм һөйләштәренә арнарға булдыҡ. Билдәле булыуынса, башҡорт телендә өс диалект бар: көнсығыш, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш. Шуларға төрлө һөйләштәр ҡарай. Мәҫәлән, көнсығыш диалектҡа арғаяш, ҡыҙыл, мейәс, салйоғот, әй һөйләштәре инә. Көньяҡ диалект дим, туҡ-соран, урта, һаҡмар һөйләше, эйек-һаҡмар һөйләштәрен үҙ эсенә ала. Ә бына төньяҡ-көнбайыш диалект ҡариҙел, танып, ыҡ һәм ғәйнә һөйләштәрен берләштерә. Һәр һөйләштең үҙенсәлектәре бар һәм бик ҡыҙыҡлы һүҙҙәр осратырға мөмкин. Ҡайһы берҙәрен һеҙ ҙә табып ҡарағыҙ.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**48-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Антоним. Йопар. Өйрәк. Сара. Әсетке. Һайыҫҡан. Кипр. Өкө. Сутана. Десна. Ҡарға. Бөркөт. Тумыртҡа. Ҡарлуғас. Йома. Утар. Мышы. Лапы. Ағас. Ыҙма.

**Вертикаль буйынса:** Һандуғас. Сыйырсыҡ. Аҡтар. Ҡасҡын. Лампас. Ҡом. Төйләгән. Фа. Ауылсы. Рәт. Тост. Мәрәкә. Көс. Батыр. Ыҙа. Тартай. Торна. Елена. Тана.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 декабрь "Килен"** (З. Мусина, Ф. Ғарипов, инсц. З. Бураҡаева), драма. 16+

**13 декабрь "Йырланмаған йырым һин"** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль милодрама. 16+

**14 декабрь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И.Йомағолов, Ф.Ғарипов), музыкаль комедия. 16+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 декабрь "Всё могло бы быть иначе..."** (И. Губач, М.Күлбаев), лирик комедия. 19:00. 16+

**14 декабрь "Аҡмулла"** (З. Буракаева, Р. Хәкимов). 6+

**15 декабрь "Хыялым һәр саҡ бейек"** Гөлдәр Ишҡыуатованың концерты. 12+

**16 декабрь "Пеппи длинныйчулок"** (А. Линдгрен, О. Пронин). 10:00 һәм 12:00. 0+

**17 декабрь "Две Бабы-яги"** (Р. Сеф, Т. Карелина, М.Күлбаев), әкиәт. 10:00 һәм 12:00. 0+

**17 декабрь "Батыр йөрәк"** (Р. Хәкимов), әкиәт. 11:00 һәм 13:00. 0+

**18 декабрь "Золушка"** (Ш. Перро, М.Күлбаев), әкиәт. 10:00 һәм 12:00. 0+

**18 декабрь "Батыр йөрәк"** (Р. Хәкимов), әкиәт. 11:00 һәм 13:00. 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**12 декабрь "Нимә ул Яңы йыл?"** (Д. Щербакова), музыкаль спектакль. 18:00. 0+

**13 декабрь "Нимә ул Яңы йыл?"** (Д. Щербакова), музыкаль спектакль. 11:00 һәм 13:00. 0+

**13 декабрь "Аҡ сысҡандар мажараһы"** (С. Чураева), музыкаль спектакль. 12:00 һәм 15:00. 0+

**14 декабрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12:00 һәм 15:00. 0+

**18 декабрь "Снеговик и Солнышко"** (А.Малахов).12:00. 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 декабрь** Башҡортостандың халыҡ артисы **Азат Биксуриндың** юбилей концерты. 12+

**15 декабрь "Серенада Солнечной долины. Классика джаза"** БДФ-ның Биг-бэнды концерты. 16+

**17 декабр**ь XIX Халыҡ-ара **"SAUERFEST"** орган фестивален ябыу. **Маттео Имбруно** (орган, Нидерланд/Италия) концерты. 12+

**18 декабрь "Юҡҡа түгел, юҡҡа түгелдер"** Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы **Йәмил Әбделмәновтың** ижад кисәһе. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**12 декабрь "Правда за нами"** (Г.Янышева), әҙәбимузыкаль лекторий. 6+

**13 декабрь "Маугли. Книга джунглей"** (Р.Киплинг, Р.Ғәйнуллина), әкиәт. 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**12 декабрь "Ятҡа бирер йәрем юҡ!"** (В. Красногоров), комедия. 16+

**14 декабрь "Урман оркестры"** Башҡорт теле көнөнә ҡарата сара. 0+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**12 декабрь** Башҡортостандың халыҡ артисы **Вәкил Йосоповтың** хәтер кисәһе. 6+

## БР Милли музейы

**12 декабрь "Рәсәй Федерацияһының төп законы"** Рәсәй Конституцияһына индерелгән үҙгәрештәрҙе аңлатыу һәм таратыу буйынса сара. 11:00 - 17:00. 12+

**13 декабрь "Быуындарҙың ижад күпере"** "Яныбай Хамматов. Тарихҡа алтын күпер" күргәҙмәһе сиктәрендә яҙыусының ейәнсәре һәм яҙыусылар менән ҡунаҡ сәйханаһында осрашыу. 15:00. 6+

**18 декабрь "Урманда ҡышҡы хәлдәр"** интерактив экскурсия. 15:00. 6+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# СИБАЙҘАР ТАҢ ҠАЛДЫРА

**Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: зал халыҡ менән тулы, ә сәхнәнән скрипка менән ҡурай моңдары бергә үрелеп ағыла, йөрәктәргә тула, күңелдәрҙе елкендерә, тик һис тә генә лә битараф ҡалдырмай... Был - ҡыштың тәүге көндәрендә Өфөнөң Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында Сибай концерт-театр берекмәһенең билдәле хиттарға һәм яңы йырҙарға, дәрт-дарман менән тулы сағыу концертынан бер күренеш.**

Шулай хисле нотала башланып киткән сара артабан да халҡыбыҙ ижадының аҫыл өлгөләре булған йырҙар, бейеүҙәр менән дауам итте. Ғаяз Ғәйетбаев, Айгөл Әсәҙуллина, Йәғәфәр Нәҙершин һәм башҡа артистар башҡарыуында яңғыраған халыҡ йырҙарының поппури булып бер моң гәлләмәһенә тупланыуы режиссер Сулпан Асҡарова тарафынан ҡулланылған бик урынлы алым ине. Шулай уҡ "Тарпан" төркөмөнөң рухлы йырҙары менән камил рәүештә бер-береһе менән бәйләнеп киткән "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүҙәре залда ултырыусыларҙың иғтибарын тулыһынса яулап, башкөллә тамашаға сумыу мөмкинлеген бирҙе.

Борон-борондан яугир булған беҙҙең халҡыбыҙ, илем, Ватаным тип тәнен дә, йәнен дә аямаған. Оркестр башҡарыуындағы Илдар Хисаметдинов көйөнә яҙылған "Салауат тураһында хикәйә" композицияһы бөйөк батырыбыҙ рухын иҫкә алыу форсатын бирҙе. Ә артабанғы йырҙар хәҙер инде бөгөнгө көндә ил тыныслығы хаҡына ҡанын түккән яугирҙарҙы онотмаҫҡа өндәү булып яңғыраны.

Ошондай еңел булмаған ваҡытта күңелдәребеҙҙә булған һөйөү хисе генә төшөнкөлөккә бирелмәҫкә ярҙам итә алалыр ул. Шуның өсөн дә саранһың икенсе өлөшө тап ошо оло хисте бар тамашасылар менән дә бүлешеүгә арналғайны. Күптәр яратып тыңлаған, төрлө телдәге дәртле йырҙар илһамландырҙы, кәйефтәрҙе күтәрҙе. Мәҫәлән, Учалы егете Азамат Әхмәтханов башҡарыуындағы итальян телендә яңғыраған йырҙы халыҡ яратып ҡабул итте. Әйткәндәй, көслө баритон тауышлы был артистың башҡорт халыҡ йырҙарын да, итальян, немец композиторҙарының әҫәрҙәрен дә, ретро йырҙарҙы ла берҙәй оҫта, моңло итеп башҡарыуы һоҡландырҙы. Дарманлы сибайҙарҙың башҡорт рухы, илһөйәрлек рухы менән һуғарылған был сығышы яугир халҡыбыҙға мәҙхиә булып яңғыраны.

**Алһыу ИРҒӘЛИНА.**

# ШАЯРТА ЛА БЕЛӘЛӘР!

**Өфөлә Башҡорт теле көнөнә арналған ҙур КВН фестивале үткәрелде. Башҡорт асыҡ КВН лигаһының баш мөхәррире Урал Кәримов хәбәр итеүенсә, фестивалдә республиканың төрлө райондарынан 10 иң яҡшы мәктәп һәм йәштәр командаһы ҡатнашты.**

Башҡорт асыҡ КВН лигаһының ҙур һәм бәләкәй кубогы, шулай уҡ "Һәнәк" журналының махсус призы уйнатылды. Урал Кәримов һүҙҙәренсә, фестиваль йәштәрҙең заманса юморын, йолаларын һәм туған телгә һөйөүен берләштергән сағыу байрамға әйләнде. Бынан алдараҡ Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев һәләтле йәштәрҙең КВН аша оло тормошҡа юллама алыуы тураһында әйткәйне. "10 йыл самаһы элек, Өфөнөң йәштәр эштәре буйынса комитетында эшләгән сағымда, баш ҡала КВН-ын тергеҙеү менән шөғөлләндек, минеңсә, маҡсатыбыҙға өлгәштек. Беҙҙең команда Юғары лигала ҡатнашты, Беренсе каналда сығыш яһаны, тәжрибә тупланы. Шул ваҡытта мәктәп йәшендәге балаларҙы, студенттарҙы һәм эшсе йәштәрҙе үҙ эсенә алған йәйге кубок булдырылды. КВН күптәр өсөн мауығыу ғына түгел, ул йәшәү рәүеше лә. Бында йәштәр оло тормошҡа юллама ала. Республиканың ике командаһы үҙәк лигаларҙа уйнай, мәҫәлән, нефтекамалар Премьер-лигала яҡшы сығыш яһаны. Беҙ һәр ваҡыт уларҙың федераль кимәлдә лайыҡлы сығыш яһауына иҫәп тотабыҙ", - тине Урал Килсенбаев (12+).

# ФАРМАН ХАНЫМ КЕМ УЛ?



**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында үзбәк драматургы Сәйет Әхмәт пьесаһы буйынса ҡуйылған "Фарман ханым" спектакленең премьераһы булды.**

Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, спектакль тамашасыларҙы ғаилә йылыһы һәм көнсыгыш ҡунаҡсыллығы мөхите булған ҡояшлы Ташкентҡа алып килде. Фарман ханым - донъялағы иң яҡшы әсәй, ҡәйнә һәм өләсәй. Улдары һәм килендәре уның ҡанаты аҫтында йәшәй. Башҡортостандың халыҡ артисы Гүзәл Маликова сәхнәлә ошо ҡапма-ҡаршылыҡлы героиня образын сағыу итеп кәүҙәләндерҙе. Кинйә килен Нигора ишле ғаиләнең тыныс ҡына барған тормошона үҙгәрештәр индерә. Фарман ханымдың тәртиптәрен ҡабул итергә теләмәйенсә, килендәштәрен фетнәгә ҡоторта. Нигора ролен "Ай тотолған төндә" премьераһында Зөбәржәт роле менән тамашасыларҙың күңелен яулаған Сабина Кирәева башҡара. "Фарман ханым" - комедия ғына түгел, ә ысын мәғәнәһендә күңел байрамы. Спектаклдә дәртле бейеүҙәр, моңло үзбәк йырҙары һәм көлкөлө хәлдәр күп. Шул уҡ ваҡытта ул тамашасыларҙы мәңгелек ҡиммәттәр - ғаилә, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре һәм традицияларҙы һаҡлауҙың мөһимлеге тураһында уйланырға мәжбүр итте.

Музыкаль комедияның режиссеры Уланмырҙа Ҡарыпбаев күтәрелгән теманың әһәмиәтен билдәләне: "Минеңсә, хәҙерге ваҡытта көндәлек ығы-зығы менән күптәр хатта яҡын туғандары тураһында ла онота башлаған. Мәҫәлән, мин бер туғаным менән ярты йылға бер күрешәм, бер-беребеҙҙән алыҫ та йәшәмәйбеҙ. Өләсәйебеҙ икенсе ҡалаға күсеп киткәнсе уның менән көн һайын осраша инек. Йыш ҡына кешеләр ата-әсәләренә шылтыратырға онота. Әгәр спектаклдән һуң кемдер әсәһенә, атаһына йәки яҡын туғандарына шылтыратҡан икән, тимәк, беҙ маҡсатыбыҙға өлгәшкәнбеҙ.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ТАУАРЫҢ БАҘАРЛЫМЫ?

**Баҙарҡай касалаға өймәләм баҙам һалғандар. Бындай баҙарлыҡ кемгә оҡшамаҫ? Баҙарлап кейенгән балалар көттөрмәй баҙам менән һыйланырға ла тотондо.**

**Баҙам.** Сәтләүек һымаҡ емешле көньяҡ ағасы һәм уның емеше. Миндаль. *Баҡсала баҙам ағасы сәскәгә күмелгән. Баҙам сәтләүеген ебетеп ашау файҙалыраҡ.*

**Баҙам биҙҙәре.** Ауыҙ ҡыуышлығындағы тукыма тупланмаһы. *Тамаҡ ауыртыуы ҡайһы ваҡыт баҙам биҙҙәре шешеүенә бәйле була. Баҙам биҙҙәре ҡыҙарып тора.*

**Баҙарҡай.** Диалектта "биҙәкле" тигән мәғәнәлә ҡулланыла. *Урамды баҙарҡай йорт ҡаптҡалары биҙәй. Баҙарҡай көйәнтәһенә баҙарҡай күнәктәрен элгән килентә һыу юлын күрһәтәләр.*

**Баҙарлау.** Баҙарланыу. Баҙарға барыу. *Кәрәк-ярак алырға тип, баҙарларға сыҡтыҡ. Баҙарланыуыбыҙ уңышлы булды.* Баҙарлауҙың тағы бер мәғәнәһе - әйберҙе, өҫ-башты ҡәҙерләп тотоу. *Ата-әсәнән ҡалған ҡомартҡы монаятты балалары баҙарлап тора. Үҙе яһаған биҙәүесте ҡыҙыҡай баҙарлап ҡына таға.*

**Баҙарлыҡ.** Баҙарҙан алып ҡайтҡан күстәнәс була баҙарлыҡ. *Затлы баҙарлыҡ. Баҙарлыҡҡа еләк-емеш алыу.* Диалектта баҙарлыҡ "баһа, хаҡ" мәғәнәһендә лә осрай. *Матур һауытҡа һалыу, күркәм итеп төрөү тауарҙың баҙарлығын күтәрә.*

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮРЕ ҠАРТАЙҺА ЛА...

## бер ҡуйлыҡ кеүәте ҡала

Берәү бар - абынғанға аяҡ сала, берәү бар - йығылғанды тотоп ҡала.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешелек йәмғиәтенең тормошо тәбиғәт ҡанундары менән билдәләнмәй.

**(Симона де Бовуар).**

Хоҙайҙан һуң беҙ ҡатын-ҡыҙ алдында бурыслы: ул тәүҙә беҙгә ғүмер бирә, һуңынан шул ғүмерҙе мәғәнәле итеүгә бар көсөн һала.

**(Каролина Бови).**

Әгәр ҙә уңыштар һин эшләгән эштәргә ярашлы булһа, кешеләр араһындағы ихлас мөнәсәбәттәр байтаҡҡа кәмер ине.

**(Зигмунд Фрейд).**

Кәрәк саҡта тәүәккәллек күрһәтмәгән әҙәмде аҡыллы кеше тип иҫәпләп булмай.

**(Генри Бичер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Һәр кем үҙ исемен мәңгеләштерергә ынтыла: берәүҙәр, ысынлап та, быға изге эштәр атҡарып, икенселәр нимәгәләр үҙ исемен ҡушып өлгәшә...**

**Бер кеше, үлгәс, уның исемен үҙе төҙөгән бер бинаға ҡушырға васыят әйтә. Күпмелер ваҡыттан һуң ул донъя ҡуя һәм баяғы бинаның ҡыйыҡында уның исеме уйылған матур таҡта барлыҡҡа килә. Ләкин берҙән-бер көндө янғын сығып, бина ла, баяғы яҙыулы таҡта ла арыу ғына зыян күрә. Ахмаҡ халыҡ яҙмыш ишараһын аңламай: улар бинаны һәм баяғы таҡтаны матур итеп ремонтлап ҡуя. Бер аҙҙан тағы янғын сыға һәм бинаға, бигерәк тә яҙыулы таҡтаға тәүге янғындағыға ҡарағанда ла ныҡыраҡ зыян килтерә. Халыҡты был да туҡтатмай һәм улар тағы ла бинаны ремонтлап, ялтыратып ҡуя. Хәҙер инде берәү ҙә көтмәгән хәл була: көслө дауыл сығып, бинаны йөшен уты ялмай һәм тулыһынса емереп, яндырып, көлгә ҡалдыра. Халыҡтың бинаны тергеҙергә теләге лә, аҡсаһы ла ҡалмаған була. Ә шулай ҙа баяғы үҙен мәңгеләштереүҙе васыят итеп ҡалдырған кешенең исеме яҙылған таҡтаны ғына яңыртып, ергә һалып ҡуялар...**

**Ваҡыт үтә, был тирәлә яңы быуын кешеләре йәшәй башлай. Бер ваҡыт уларҙың кемеһелер баяғы бина урынында кеше исеме яҙылған таҡтаны табып ала. Уның кем икәнен берәү ҙә белмәй, берәүҙең дә хәҡиҡәткә төшөнөргә теләге лә булмай. Ләкин зыяратта ла шул уҡ исем яҙылған ҡәберҙе күргәс, "Ике тапҡыр үлеүсе кеше" тигән мәғлүмәтте генә теркәп ҡуялар..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танылғысы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33.
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11.12.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 11.12.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 12.12.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тираж - 2707
Заказ - 2298